ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискә Өфө

3-9 март (буранай) 2018

№9 (791)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Дәреслектә ләбаһа хикмәт! 6

Йәй ташы һәм... ямғыр саҡырыу йолалары хаҡында 7

Башҡорт донъяһында... зәңгәр күҙләләр ҙә, ерән сәсләләр ҙә етерлек 8-9

Егерменселәр һынатмай! 11

ТВ-программа 14









*Ҡайһы бер балалар шулай була. Атаһының малына ышанып, һис кәсеп һәм эш юлына кермәй. Ялҡаулыҡҡа ғәҙәтләнә. Ахырҙа, бер көн килер, аҡсалары ла бөтәр, йәшәр өсөн ҡулда һөнәрҙәре лә булмаç. Шуның өсөн, ата малына ышанып тормай, ни ҡәҙәр бай балаһы булһағыҙ ҙа, фәҡир кешенең балаһы кеүек, һөнәр өйрәнеү өсөн тырышығыҙ.*

***Ризаитдин нәсихәттәренән.***

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*



## ҺИН ҠАЙҘАН, ҠУРАЙ?

**Башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурай Башҡортостандың төбәк бренды сифатында теркәлде. Роспатенттың Сәнәғәт милке федераль институты ҡурайҙың барлыҡҡа килгән урынын теркәне. Институттың рәсми сайтында баçылған документта ҡурайҙың сығышы - Башҡортостан Республикаһы тип яҙылған.**

Ҡурайҙың сығышын теркәү буйынса эш 2014 йылда уҡ башланғайны. Уның башланғысында Башҡортостандың халыҡ артисы, билдәле ҡурайсы Азат Айытҡолов тора. Мәҙәниәт министрлығының Республика халыҡ ижады үҙәге документтар әҙерләгән ваҡытта өçтәмә рәүештә ғилми тикшеренеүҙәр үткәрҙе, архив сығанаҡтарын туплау йәһәтенән күп эш башҡарылды. Башҡортостандың Ҡурайсылар берлеге лә әүҙем ҡатнашты. Рәсәйҙең Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы эксперт комиссияһының 2017 йылдың июнендәге һығымтаһы нигеҙендә ноябрь айында ғариза бирелде. 2018 йылдың 1 мартында ҡурайҙың сығышы Башҡортостан булыуы тураһында рәсми ҡарар баçылып сыҡты.

*АФАРИН!*

## НАҘГӨЛДӨҢ БӘХЕТЛЕ БИЛЕТЫ

**"Һин ҙур йыһан бульдозеры менән беҙҙе тапап үтеп киттең. Һаман да тәндәр зембәрләп тора... Ә инде беҙ боролғас, уттарҙың күплеге һәм, әлбиттә, һинән урғылған яҡтылыҡ күҙҙәрҙе ҡамаштырҙы... Был ниндәйҙер мөғжизә ине! Миңә хатта нимәлер тип әйтеү ҙә мәғәнәһеҙ кеүек", - тине унық сығышынан һуң Беренсе каналда барған "Голос. Дети" проектының баһалама ағзаһы йырсы Пелагея.**




(Дауамы 16-се биттә).

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Гәзит-журналдарҙағы "һыу" нимә ул, йәғни уҡыусыға ниндәй материал кәрәк, ниндәйен ул "һыу" тип иçәпләй?

***Зөлфиә АҠЪЮЛОВА, балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе:*** Һәр кем үҙенең һөнәренә яҡыныраҡ булған темаларҙы үҙ итә инде ул. Мин, мәçәлән, тәрбиә темаһына арналған мәҡәләләрҙе күрһәм, ҡыуанып китәм. Иң тәүҙә шуларҙы уҡыйым. Бөгөн интернетта ла был тема ярайһы яҡтыртыла, төрлө белгестәрҙең фекере менән танышырға була. Тик башҡорт телендәге баçмаларҙа был йәки башҡа тема тап үҙебеҙҙең менталитетҡа бәйләп асыла, унда һин үҙеңде танышыһың, үҙеңдең баланды күрәһең. Шуға ла был һорауға яуап биреүселәр "юрғанды" үҙенең яғына тартырға ашығыр, тип уйлайым.

Башҡорт гәзитенең, журналының төп үҙенсәлеге шунда ла инде - ул һинең милли баçмаң, ул һиңә барыбер яҡыныраҡ. Унда яҙылғанға ныҒыраҡ ышанаһың. Яңы шиғырҙар, хикәйәләр тәүҙә гәзит-журналда баçыла, уларҙы көтөп алам. Балалар үçтергән кеше булараҡ, башҡорт телендәге балалар баçмаларын да алдырабыҙ, бергәләп уҡыйбыҙ. "Һыу" тип әйтерлек бер нәмәне лә хәтергә төшөрә алмайым. Һәр бер мәҡәлә урынлы һымаҡ, һәр хәлдә, шулай кәрәк икән, тип ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ бит инде. Миңә оҡшамаған тема башҡаларға яҡын булыуы бар. Иң мөһиме, милли баçмаларыбыҙ булһын ғына, тип уйлайым. Ә уҡырлыҡ, фәһем алырлыҡ әйберҙәрҙе гәзит биттәренән барыбер табырға була.

(Дауамы 2-се биттә).

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тәңәлдергән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө енел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕР ЫНТЫЛЫШ, БЕР ТЕЛӘКТӘН...

*Хәнә БАҺАУТДИНОВА, Рәсәй Федерацияһы дөйөм белем биреү мәктәптәренең маҡтаулы хеҙмәткәре, Стәрлебаш районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:* Иң беренсе теләк шул: ил-көндәребеҙ - тыныс, күгебеҙ аяҙ булһын! Ҡалғандары үҙебеҙҙән тора: көнитмешебеҙ ҙә, йәшәү рәүешебеҙ ҙә, һаулығыбыҙ ҙа, байлығыбыҙ ҙа. Маҡсат ҡуйып йәшәй белеү, "бәхет" һүҙенең асылын аңлап, шуға ынтылып, лайыҡлы тормош юлы үтеүҙән тора. Илдә һәр ваҡыт реформалар, эксперименттар, төрлө исемдәр менән йөрөтөлгән үҙгәрештәр уйлап табылып тора. Әүҙен аҡлаған, яҡшы һөҙөмтәләргә килтергән алымдар, методикалар, программалар, фәндәр, матур традициялар ниңә юҡҡа сыға һуң? Әлеге лә баяғы, быға беҙ ҙә ғәйепле. Хоҡуҡлы булып, рухыңды егеп, һаҡлай, яҡлай белмәгәнлектән, битарафлыҡтан, яуаплылыҡ алырға теләмәүҙән дә килә был. Һәр кем ғаиләлә, мәктәптә, йәшәгән мөхиттә, ауылда йәки ҡалала, ил күләмендә үҙе нимә өсөн яуаплы, шуны урынына еткереп эшләһә, кемгәлер һылтап, үҙ ғәйебен башҡаларға япһарып, нимә булһа ла булыр тип, быларҙы кемдер эшләргә тейеш, тиген фекерҙә тормаһа, йәғни яуаплылыҡты өҫтөнә ала белһә - дөрөҫ һәм яҡшы булаҫаҡ. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, күп ваҡытта беҙ нимәлер булғас ҡына иҫкә киләбеҙ кеүек. Ә бит бөтә нәмәгә лә ғаиләлә нигеҙ һалына: тәрбиә, рух башы - ғаилә. Шуға донъялағы глобаль проблемаларҙың барыһына ла тукталмайынса, йәмғиәттең иң бәләкәй ячейкаһы - ғаиләгә иғтибар итәйек. Халҡының бала саҡтан күнеленә һеңгән, йөрәгендә мәңгелеккә урын алған телен, ерен-һыуын, тәрбиә ҡанундарын, кешелек булмышын һаҡлаһын бала. Тормош ауырлыҡтары алдында аптырап ҡалмаһын ата-әсә, балаларына өлгө булып, ҡыҙҙарҙы - әҙәпле, белемле, егәрле, хисле, нәзәкәтле, булаҫаҡ әсә итеп, малайҙарҙы - тырыш, үҙаллы, үҙ фекере, үҙ һүҙе булған, йүнсел ир-егет, ғаилә башлығы булырлыҡ кеше итеп тәрбиәләргә тейешбеҙ.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтмәйенсә булмай, белем усаҡтарында ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар тигеҙләнһә, бик һәйбәт булыр ине. Сөнки уландарыбыҙ булдыҡлы, етмеш төрлө һөнәргә эйә булған ышаныслы ир булып үҫһен өсөн ир-егеттәрҙең мәктәптә эшләүе мотлаҡ. Шунан инде вазифалы кешеләрҙең яуаплылығы мөһим. Проблемаларҙы күҙ уңынан ысҡындырмай, баламы, уҡыусымы, йәш кешеме, урта быуын йәки өлкән быуын кешеһеме - һәр береһенә иғтибар һәм ихтирам кәрәк. Халыҡты ойоштороу өсөн ауыл биләмәләрендә, райондарҙа беҙҙең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары етәкселәр өсөн иң ҙур ярҙамсы була ала. Йәмәғәт башланғысындағы ойошманы күтәремләп, ярҙам итеп, әллә ниндәй эштәр атҡарырға мөмкин. Шөкөр, хәҙер бер нисә йыл "Ағинәй" ойошмаһы шулай эшләй ҙә инде. "Аҡһаҡалдар ҡоро" ла ойоштороп, бергә эш алып барһаҡ, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Үҙҙәренең абруйлы, ихтирамлы булыуҙары менән ике ойошма ла изге эштәрҙе башлап йөрөүсегә әүерелһә, башҡаларҙы ла эйәртә ала бит. Шағир Ирек Кинйәбулатов әйткәнсә:

*Кҡтән төшмәй беҙгә бәхет,*
*Ул бит тора үҙебеҙҙән.*
*Бер ынтылыш, бер теләктән,*
*Эшебеҙҙән, һүҙебеҙҙән.*

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## Гәзит-журналдарҙағы "һыу" нимә ул, йәғни уҡыусыға ниндәй материал кәрәк, ниндәйен ул "һыу" тип иҫәпләй?

(Башы 1-се биттә).

*Илнур БУЛӘКОВ, ғилми хеҙмәткәр, тарих фәндәре кандидаты:* Башҡорт телендә тематик баҫмалар юҡ. Рус телендә ниндәй генә гәзит юҡ бит, айырым сәйәси гәзитме, ғаилә өсөн тәғәйенләнгәнме, автомобилистар, баҡсасылар, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыусылар өсөн генәме... Башҡорт телендәге гәзит-журналдар, балалар, үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгәндәрен иҫәпләмәгәндә, ошо темаларҙың бөтәһенән дә үҙ эсенә ала. Шуға ла барыһы ла кәрәктер инде. Баҡсала еләк үҫтереү тураһында мин уҡымаһам ни, уны ауылдағы апайҙар уҡый. Шуға ла бына был-был мәҡәләләрегеҙ кәрәкмәй, тип тороп булмай. Шулай ҙа хәҙер гәзиттәрҙә яңылыҡтар баҫтырыуҙың кәрәге юҡтыр, тип уйлайым. Яңылыҡ ҡасан үҙ маҡсатына өлгәшә? Мәлендә еткерелһә. Ә был ролде интернет, телевидение-радио яҡшы үтәй. Кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һөйләп кенә торалар.

Ә бына абруйлы шәхестәрҙең, белгестәрҙең фекерен уҡыу файҙалы ла, ҡыҙыҡлы ла. Был йәһәттән "Киске Өфө"нө башҡаларға өлгө итеп ҡуйырға була. Яңы һан һайын үҙенсәлекле темалар тураһында һөйләшеүҙәр ойоштороло. Шулай уҡ гәзит-журналдарҙа сетерекле, көнүҙәк мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын эҙләүсе мәҡәләләр ҙә булырға тейеш. Тарихи яҙмаларҙы ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым.

*Ғаян ХӘКИМОВ, пенсионер:* Гәзит-журналдың һәр хәрефен ентекләп уҡып сығырға ғәҙәтләнгәнмен инде. Ауылда ҡышын эш тә аҙыраҡ, мал ҡарап инәм дә, гәзит уҡырға ултырам. Көҙөн-ҡышын күберәк әҙәби әҫәрҙәр бирелп булмаймы икән, тип уйлағаным бар. "Йәшлек" гәзитендәге ғибрәтле хәлдәр, кеше яҙмыштары тураһындағы яҙмалар ҙа күңелгә хуш килә. "Шоңҡар"ҙы ла йәштәр журналы тип тормайым, яҡшылап уҡыйым. "Киске Өфө" гәзитендәге тарихи бит оҡшай, әллә күпме мәғлүмәт белеп ҡалынды өлкәнәйгән көндә. "Мосолман әҙәбе" рубрикаһын да ҡарап барам, уны апайһыҙ күберәк үҙ итә. Башватҡыстарҙы икәүләп сисәбеҙ, китап кәштәһендә онотолоп ятҡан төрлө энциклопедиялар, географик карталар өҫтәлгә төшөп ятты хәҙер, тиҙ генә ҡарап ебәргән булабыҙ.

Бына зитыма иң тейгәне гәзиттәге реклама инде! 4 битлек район гәзитенең 2 бите реклама ла, ҡотлау! Сауҙа итеп, ҡотлашып ҡына йәшәйбеҙ, ай-һай. Әйтһән, үҙ көнөбеҙҙә үҙебеҙ күргәс, реклама баҫмайынса булмай, тип тик торалар. Башҡортостан юлдаш телевидениеһын да, һауа торошон ҡарайым, тип тоҡандырып ебәрһән, тун-пәлтә һөйләп тик тора башын-күҙен самаһыҙ буяп алған һылыу башҡорт ҡыҙҙары. Тун да булғанмы кейем, тип, үҙ алдыма ғына һөйләнеп алам. Исмаһам, рекламаларҙы төрләндереп бирһәңдәр, әтеү йыл дауамында тәүлек әйләнәһенә - шәшкә тун! Ул ниндәй бөтмәҫ рекламалыр, беҙҙең ҡолаҡтарҙы ла, күҙҙәрҙе лә йәлләмәйҙәр, исмаһам...

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**1 февралдән 31 мартҡа тиклем 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда элекке хаҡтар менән яҙылыу иғлан ителде. Йәғни һеҙ ошо айҙа 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, Рәми Ғариповтың "Сыңрау торна", Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үсемлектәре", Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан", Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры" һәм башҡа китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**



- Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.
- **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атайәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

- Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **420 һумға** яҙылырға була.
- Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға килтереп бирә: ярты йылға - **258 һум**.
- Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **258 һум**.
- Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.
- Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Кремлдә тантаналы шарттарҙа Пхёнчхандағы XXIII Ҡышҡы Олимпия уйындары еңеүселәре һәм призерҙары менән осрашты һәм уларға дәүләт наградалары тапшырҙы. Уйындарҙа алтын миҙал яулаусы Өфө хоккейы тәрбиәләнеүсеһе Андрей Зубарев дәүләт башлығынан "Дуҫлыҡ Ордены"н алды. Ул шулай уҡ 4 миллион һум һәм BMW X6 автомобиле менән бүләкләнә.

✓Владимир Путин шорт-трека 1500 метр арала "бронза" яулаған, Рәсәйҙән олимпия атлеттары командаһына беренсе миҙал бүләк иткән Өфө шорт-трексыһы Семен Елистратовҡа икенсе дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" орденын миҙалын тапшырҙы. Дәүләт нагрдаһынан тыш, Өфө шорт-трексыһына 1 миллион 700 мең һум аҡса һәм BMW X4 автомобиле бирелә. Тыуған республикаһынан ул 500 мең һум алаҫаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте менән Росавтодор "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" өҫтәнлеклө проекты сиктәрендә 2018 йылға килешеү төҙөнө. Ошо проекты тормошҡа ашырыу өсөн федераль бюджет республикаға миллиард һум аҡса йүнәлтә. Республика ҡаҙнаһынан финанслау күләме 1,055 миллиард һум тәшкил итә, Өфө бюджетынан тағы 41 миллион бүленә. Проект Өфө агломерацияһы биләмәһендә ғәмәлгә ашырыла, баш ҡаланан тыш, уға Өфө, Благовещен, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко һәм Шишмә райондары ҡарай.

✓"Дача амнистияһы" 2020 йылдың 1 мартына тиклем оҙайтылды. Алдан уны 2018 йылдың мартына тамамлау күҙалланғайны. Дәүләт Думаһы ҡабул иткән законды 28 февралдә Федерация Советы хупланы. Хәҙер граждандар тағы ике йыл шәхси торлаҡ төҙөлөшө объекттарын, ер участкаларын һәм ҡаралтыларын ябайлаштырылған тәртиптә мөлкәткә рәсмиләштерә ала. Атап әйткәндә, кадастр паспортын рәсмиләштереү процедураһын урап үтеп - ергә, ә өйгә уны файҙаланыуға тапшырыуға мотлаҡ рөхсәтһеҙ ҙә таныҡлыҡ алырға мөмкин.

✓Башҡортостан кесе һәм урта эшҡыуарлыҡтың эшлекле әүҙемлек индексы буйынса Рәсәй төбәктәре араһында беренсе урын алды. Ошо хаҡта республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй сәнәғәт форумының пленар ултырышында хәбәр итте. Башҡортостан эшлекле әүҙемлек индексы мәғәнәһе менән тикшерелгән 24 төбәк араһында урта Рәсәй мәғәнәһе 50,5 билдәһендә 60,7 баҫҡысты беренсе урын алған.

БЫЛ АЙҘА...

# РЕСПУБЛИКАМ ТЫУҒАН АЙ

**Март та тыуҙы. Быйылғы ҡыш ҡаты селләләре, ыжғыр бурандары менән ыҙалатманы, шөкөр, ләкин тәбиғәттең былдай миһырбанлығына шикләнеберәк ҡарау барлыҡҡа килде әҙәм балаһында, сөнки бөгөн булмаһа, иртәгә "кон" ҡайтарыр булып китте ул. Быйылғы ҡыш, шулай итеп, былтырғы ыҙалар өсөн ташлама булған хәлдә лә, ҡыштың -ҡышса, йәйҙең йәйсәрәк булыуы хәйерле инде.**

Быйылғы яҙға ла төрлөсәрәк фаразлауҙар бирә метеорологтар. Берәүҙәре ай аҙаҡтарына тиклем көндөҙгө һауа температураһы минус 6-7 градус тирәһендә тирбәләһә, икенселәре яҙҙы ай урталарына тиклем үк килтереп еткермәксе. Өсөнсө, дүртенсе ун көнлөктәр, улар күҙаллауынса, һауа температураһы нулдән юғары үрләй башлаясаҡ, имеш. Дөрөҫөн әйткәндә, прогноздарға беҙ әлегәрәк, һауа тороштары һәүетемсә саҡтарҙа ла, бер ни тиклем юмор менән ҡарарға өйрәнгәйнек инде, әммә тәбиғәттең һуңғы ваҡыттағы "шаяртыуҙары"на былай һис күнегеп булмай. Хәйерле йылдар, имен яуындар теләп, беҙгә "һауа кәнсәләренә" ялбарырға ғына ҡала, югиһә, тыуып килгән яҙ айының боронғоса атамаһы - буранай! Икенсе яҡтан, быныһы гәжәп тә түгел, ә бына мартта аҡман-тоҡман килмәй ҡалһа, йә ямғыр яуып ебәрһә, үәт аптырап буласаҡ!..

Буранай календарын барлауҙы уның иң мөһим даталарынан башлайыҡ. Яҙҙы бөйөк Пушкиндың ене һөймәгәнен беләбеҙ: тирә-йүндә бысраҡ, авитаминоз... Тағы ни өсөн? Иң дөрөҫ яуап: сөнки ул саҡ әле **8 Март** тигән байрам булмаған! Һауа торошо ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, ул көн күңелдәрҙә кояш балҡый, Өфө урамдарында сәскә еҫтәре аңҡый, ә ҡыҙҙар тағы ла ғүзәлерәк һәм серлерәк булып күренә. Ҡатын-ҡыҙҙың иғтибар үҙәгендә йәшәп, уларҙан илһам алып ижад иткән Александр Сергеевичҡа бик тә оҡшар ине был яҙғы көн! Лирикаға бирелеп, сәйәсәтте онотмайыҡ: **18 март** - Рәсәй Федерацияһы президентын һайлауҙар көнө. Теге йә был кандидатура өсөн тауыш биреү-бирмәү һәр һайлаусының үҙ ихтыярында, әлбиттә, ләкин быйыл һайлауҙарға әүҙем барып, юғары "явка" күрһәтеү мотлаҡ бурыс итеп ҡуйылыуы хаҡында һүҙ бара. Ысынлап та, һөҙөмтәнең ниндәй буласағына ҡарамаҫтан, һәр кемгә үҙ ихтыярын белдереү мөмкинлеген бер кем дә тыймаған - илдәге сәйәсәткә битараф булыуға ҡарағанда, мөмкинлектән файҙаланып, мөнәсәбәтебеҙҙе белдереп ҡалыу яҡшыраҡ түгелме? Был бит кандидатураларҙың тәғәйен берәүһе өсөн генә тауыш биреүгә мәжбүрләү түгел. Ирекле тауыш биреү ихтыяры - үҙебеҙҙә. Һайлауҙарға барып, беҙ илдең, ошо ил эсендә бер быуат инде үҙбилдәләнешкә эйә булып, республика статусында йәшәп килгән Башҡортостаныбыҙ киләсәген дә һайлайбыҙ.

**20 март** (1919) - Рәсәй Эшсе-крәстиән хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡортостан Автономияһы хаҡындағы Килешеүгә ҡул ҡуйылған көн булараҡ тарихта ҡалған. Киләһе йыл, мәғлүм булыуынса, Башҡортостан Республикаһы төҙөлөүгә 100 йыл тулыуҙы билдәләйәсәкбеҙ. Әммә ләкин Рәсәй



президентлығына кандидаттар араһында милли республикаларға байтаҡтан бирле теш ҡайраған һәм уларҙан нисек тә штаттар, губерналар яһап, "кыҫҡартырға" ҡырсынған кандидатуралар барлығын да онотмайыҡ, тиеүем. Хәйер, ил етәксеһе посына кем килгән хәлдә лә, милләт-ара мәсьәләләргә һаҡсыл ҡараш һәм аҡыллы сәйәсәттең Рәсәй дәүләтселеге нигеҙе икәнен аңлар дәрәжәләге шәхес булыр, тип ышанғы килә. Был юҫыҡта башҡа юл юҡ. Бөгөнгө ҡатмарлы халыҡ-ара шарттарҙа һәм, ғөмүмән, ниндәй генә заманда ла, ил ныҡлығы уның күп һанлы милләттәре ҡеүәтендә икәнен аңламаһа, зәгиф аҡыл ғына аңламаҫ. Башҡортостандың РСФСР-ҙа беренсе булып автономиялы республика статусы алыуы - күп милләтле Рәсәй шарттарында федерализм принциптарын әүҙем үҫтәреүсе сәйәсмән, Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди һәм уның көрәштәштәре эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһе ул. Милли азатлыҡ һәм аҫабалыҡ хоҡуҡтарын яҡлап, быуаттар буйына ҡан түккән башҡорт халҡын һәм уның милли-территориаль хоҡуҡтарын һаҡлап ҡалыу юлында йәндәрен бирергә әҙер уҡымышлы, батыр ир-егеттәре булған башҡорт халҡы, ул ниндәй генә ҡырыуҙарға дусар ителгән хәлдәрҙә лә, яҡлаулы һәм ҡурсаулы булған, сөнки борон-борондан, Урал батыр заманынан алып, Башҡорт иленең ихтирамлы аҡһаҡалдары, уҡымышлылары, әүлиәләре, зыялылары, мәғрифәтселәре, шағирҙары, сәсәндәре, батырҙары күп булған. Аҡһаҡалдар һәм әүлиәләр халыҡ батырҙарын тәрбиәләгән, фатиҳаһын биргән. Милли азатлыҡ көрәшселәренең лидеры Әхмәтзәки Вәлидиҙең дә рухи остазы, уҡытыусыһы була. Башҡорттоң бөйөк йәмәғәт һәм дин эшмәкәре, ишан, мәғрифәтсе, Нәҡшбәндиә тәриҡәте ағзаһы, "Рәсүлиә" мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы Зәйнулла Рәсүлев Әхмәтзәки Вәлидиҙең зирәклеген ул үҫмер сағынан уҡ үтә күрә һәм уға фатиҳаһын бирә. Шуға ла Вәлидиҙең донъяға мөнәсәбәте, ижтимағи-сәйәси ҡараштары "башҡорт халҡының рухи короле" тип нарыҡланған Зәйнулла ишан йоғонтоһонда яралыуы һәм формалашыуы осраҡлы түгел. Был хаҡта З.Вәлиди үҙе аҙаҡ: "Кем белә, әгәр ваҡытында мөхтәрәм шәйехебеҙҙең минә ҡарата иғтибары һәм хуплауына лайыҡ булмаһам, ун биш йәшемдә мин дә, башҡа тиҫтерҙәрем һымаҡ, берәй сауҙагәргә ялланып, ябай приказчик булып китер инем", -тип яҙа. Ошо тәңгәлдә буранайҙың тағы бер шанлы ваҡиғаһына яҡынлаҡ: **25** (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа - 28) **март** - Зәйнулла Рәсүлевтың тыуыуына - 185 йыл (1833-1917) тула. Был көн бөйөк ишандың хәтер кисәһе ойошторолоп, аят-доға бағышлауҙар менән үткәрелер, тигән өмөттә ҡалабыҙ.

Был айҙың тағы бер үҙенсәлеге шунда: буранайҙа Бөтөн донъя яҙыусылар (**3**) һәм Бөтөн донъя шиғриәт (**21**) көндәре билдәләнә. Шуғамылыр, мартта байтаҡ яҙыусыларыбыҙ тыуған көндәрен, юбилейҙарын билдәләй. Ә бына ай календарының Иммунитет көнө (**1**) менән асылыуы ла юҡҡа түгелдер. Ҡайһы берәүҙәрҙе, югиһә, февралдә үк ОРВИ, ОРЗ-лар аяҡтан йыҡты. Интернеттағы, грипп быйыл, бәлки, беҙҙе урап үтер, тигән имеш-мимешкә ышаныуы бик ҡыйын, сөнки мартта булмаһа, апрелдә килеп баҫыуы ла ихтимал был дошмандың. Шуға ла сыныҡыу, әүҙем хәрәкәт, файҙалы туҡланыу, режим талаптарын үтәү юлы менән иммунитетты ныҡыта тороу хәйерле. Шул саҡта, бәлки, Халыҡ-ара бәхет көнө (**20**) беҙгә лә йылмайыр, сөнки һаулыҡ - иң ҙур бәхет, тип йыуанабыҙ һәм шуны ихлас теләп йәшәйбеҙ, ә бәхетте аҡсаға алыштырған байҙар, әйҙә, миллиардтары менән сирләһен!

Буранайҙың ҡалған көндәрен ҡыҫҡаса ғына байҡайыҡ: Башҡорт ғаиләһе көнө (**1**), Бөтөн донъя ҡырағай тәбиғәт көнө (**3**), Теш табибы (**6**), Архивтар (**8**), Наркоконтроль хеҙмәткәрҙәре (**11**), Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау (**15**), Моряк-подводниктар (**19**), Урмандар (**21**), Бөтөн донъя һыу ресурстары (**22**), Рәсәй мәҙәниәт хеҙмәткәре (**25**), Бөтөн донъя театр (**27**) һәм Ерҙе һаҡлау (**30**) көндәре билдәләнәсәк.

**Буранайҙа тыуғандар:**

**1 -** шағир, БАССР-ҙың С.Юлаев исемендәге премияһы лауреаты **Хәким Ғиләжевтың** тыуыуына - 95 йыл (1923-1997).

**2 -** тарихсы, этнополитолог, тарих фәндәре докторы, профессор **Билал Юлдашбаевтың** тыуыуына - 90 йыл (1928-2001).

**3 -** шағирә, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Таңһылыу Ҡарамышеваға** - 70 йәш (1948).

**6 -** прозаик, БАССР-ҙың Салауат Юлаев премияһы лауреаты **Фәрит Исәнғоловтың** тыуыуына - 90 йыл (1928-1983).

**10 -** Башҡортостандың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты, БР Театр эшмәкәрҙәре берлеге рәйесе **Әхтәм Абушахмановҡа** - 70 йәш (1948).

**13 -** юридик фәндәр кандидаты, 1970-1984 йылдарҙа - БАССР прокурорының беренсе урынбаҫары, 1984-1986 йылдарҙа Өфө ҡала прокуроры, РСФСР-ҙың атҡаҙанған юристы **Зәйнулла Айытҡоловҡа** - 90 йәш (1928).

**18 -** ҡурайсы, йырсы, актер, Башҡортостандың халыҡ артисы, Ш.Бабич исемендәге премия лауреаты **Рәсүл Ҡарабулатовҡа** - 50 йәш (1968).

**19 -** мәғрифәтсе, шағир, сығышы менән Әбйәлил районынан **Шафиҡ Әминев Тамьяниҙың** тыуыуына - 160 йыл (1858-1936).

**-** геолог-химик, геология-минералогия фәндәре кандидаты, профессор, РФ һәм БР Журналистар берлеге ағзаһы **Миңлеәхмәт Моталовтың** тыуыуына - 90 йыл (1928-2012).

**20 -** прозаик, журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Сабир Шәриповҡа** - 70 йәш (1948).

**22 -** Рәғәиб кисе.

**27 -** яҙыусы, педагог, журналист, Рәсәйҙең почетлы мәғариф хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Мәрйәм Бураҡаеваға** - 75 йәш (1943).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Үҙәк банк 15 февралдә лицензияһын тартып алған "Урал капиталы" банкы клиенттарына аҡсалар 28 февралдә ҡайтарыла башлай. Вкладтарҙы страховкалау агентлығынан хәбәр итеүҙәренсә, "Уралсиб" банкы түләүҙәрҙе ҡайтарыу буйынса банк-агент булды. Банк-агент бүлексәләре исемлеге, уларҙың эш режимы хаҡында мәғлүмәтте 8-800-250-57-57 телефоны буйынса алырға мөмкин.

✓Республикала көндәр йылытырға ашыҡмай. Синоптиктар февралде быйылғы ҡыштың иң һалҡын айы тип атай. "Фобос" үҙәге белгестәре мартта көндәрҙең һалҡынса, температураның уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәрҙән бер градусҡа түбән һәм апрелдең йылы булыуын фаразлай. Күҙаллауҙар буйынса, марттың тәүге декадаһының яртыһына тиклем Рәсәйҙең күпселек биләмәһендә экстремаль һыуыҡтар көтөлә. Икенсе декадала режим нормаға ҡайта, ай аҙағында иһә ғәҙәттәгенән йылыраҡ булмаҡсы.

✓"Зөләйха күҙҙәрен аса" китабы авторы Гүзәл Яхина Өфөгә килде һәм ошо әҫәре буйынса М. Ғафури исемендәге Башҡорт драма театрында сәхнәләштерелгән спектаклде ҡарап (режиссеры Айрат Абушахманов), уны юғары баһаланы һәм театр коллективына рәхмәт белдерҙе. Гүзәл Яхина Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала уҡыусылар менән осрашты, төрлө телдәрҙә донъя күргән китап тышлыҡтары күргәҙмәһен ҡараны, барлыҡ һорауҙарға ла ентекле яуап бирҙе, китаптарға автографын да ҡуйҙы.

✓Йәйге осоштар теҙмәһе сиктәрендә 2018 йылдың 28 майынан 26 сентябргәсә Өфөнән Сочиға даими рейстар башҡарыла. Билеттар һатыуға сыҡҡан да инде, бер яҡҡа осоу хаҡы яғыулыҡ иғәнәһе иҫәбе менән ете меңдән башлана. Өфөнән самолеттар дүшәмбе һәм шаршамбы һайын иртәнге 5 тула 25 минутта оса, Сочиҙан шишәмбе һәм йәкшәмбе һайын төнгө 11 тула 25 минутта (урындағы ваҡыт буйынса) күтәрелә.

✓Мәғариф һәм фән министрлығы яңы уҡыу йылында медицина, педагогика, инженерия һәм IT-һөнәрҙәре буйынса юғары уҡыу йорттарында бюджет урындары һанын арттыра, тип белдерҙе мәғариф һәм фән министры Ольга Васильева. Министр хәбәр итеүенсә, 2017 йылда мәктәп тамамлаусыларҙы вуздарҙа бюджет урындар менән тәьмин итеү кимәле 57 процент тәшкил иткән.

**"Башинформ"дан.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# МАҠСАТТАР БЕР, йүнәлеш тә бер

**Был аҙнала Өфө ҡала округы Советының XX ултырышы үтте. Уның эшендә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе урынбаҫары Франис Сәйфуллин, БР Башлығының Муниципаль берәмектәр менән хеҙмәттәшлек буйынса идаралыҡ начальнигы Григорий Букреев, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты. Ҡала Советы рәйесе Валерий Трофимов 2016 йылдың октябрендә формалаштырылған яңы депутат корпусының эшмәкәрлеге менән таныштырҙы.**

Һайлауҙарҙан һуң депутаттар корпусының составы 50 процентҡа яңыра. Алты партия вәкилдәре советта 4 фракцияға берләшеп эшләй, ике партия - фракцияһыҙ. "Халыҡ хеҙмәтселәре"нең 11-енең ике һәм күберәк юғары белеме бар, 7 кеше - фән кандидаты, 1-әү фән докторы. Милли бүленеш буйынса 53 процент самаһы - рустар, 25 проценттан - татарҙар, 22 проценты башҡорттар алып тора.

Депутаттар 11 комиссияға бүленеп эшләй. Ошо арауыҡта барлығы 231 ултырыш үткәрелгән, 169 мәсьәлә совет ултырышына сығарылған, 128 профессиональ мәсьәлә ҡаралған. Шул уҡ ваҡытта комиссияларҙың йомшаҡ яҡтары ла юҡ түгел. Иң беренсеһе - комиссиялар 2-3 кешенән генә тора. Шуның өсөн киләсәктә уларҙы эреләтеү мәсьәләһе көн үҙәгенә сыға. Шулай уҡ комиссиялар составының сифаты ла етди иғтибар талап итә.

Ҡала парламенты депутаттары барлығы 3,5 мең самаһы кешене ҡабул итә һәм 4,5 мең мөрәжәғәтте ҡарай. Сағырылыштың яңылығы булып депутаттарҙың граждандарҙы ҡабул итеүендә Совет рәйесенең дә ҡатнашыуы тора. Барлығы шундай 20 сара үткәрелеп, уларҙа 150 граждан ҡабул ителә. Граждандар, нигеҙҙә, тәҙәкләндереү, торлаҡ, коммуналь хеҙмәттәр, мәрхәмәтлек ярҙамы күрһәтеү, социаль тәьминәт мәсьәләләре буйынса мөрәжәғәт итә. Был исемлек, ысынлап та, советтың төп эшмәкәрлек йүнәлештәре булып тора. Бынан тыш, экология, архитектура, төҙөлөш, ер ҡоролошо мәсьәләләре лә күҙ уңында. Шул уҡ ваҡытта халыҡты эш менән тәьмин итеү һәм мәшғүллек, йәштәр сәйәсәте һәм спорт, йәмғиәт именлеге мәсьәләләре тейешле кимәлгә күтәрелмәгән.

Өфө ҡала округы Советы депутаттары мәрхәмәтлек менән шөғөлләнеүҙән дә ситтә ҡалмай. Уҙған саҡырылышта был маҡсатҡа йылына 34 миллион шәхсән аҡсаларын тотонһалар, былтыр сумма 40 миллион самаһына еткән.

2017 йыл Рәсәйҙә һәм республикала Экология йылы булғанлыҡтан, совет ойошторған депутат тыңлауҙарының береһе ошо темаға арнала, икенсеһе - ҡаланың санитар торошона, өсөнсөһө - вандаллыҡ күренештәренә. Һуңғы тема йыл дауамында киң мәғлүмәт сараларында ла яҡтыртыла килде һәм әле лә төп проблемаларҙың береһе булып тора, сөнки йыл һуҙымында барлығы 300 самаһы вандаллыҡ осрағы асыҡланған. Һөҙөмтәлә ҡала бюджеты 3,5 миллион һумлыҡ зыян күргән.

Дөйөмләштереп һығымта яһағанда, Советтың эш маҡсаты - халыҡ фекеренә ҡолаҡ һалып, ҡаланы таҙараҡ, матурыраҡ, уңайлыраҡ итеү. Ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та граждандар өсөн йәшәүгә уңайлы шарттар тыуҙырыуҙы беренсе урынға ҡуйып, был турала даими тылҡып тора. Тимәк, властың төрлө кимәлендә бер маҡсатта эшләп кенә алға ҡуйылған бурыстарға өлгәшергә мөмкин. Ултырыштың төп һығымтаһы ла ошо булды.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!



**Рәсәй Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны, илдең үсеш өҫтөнлөктәрен билдәләне.**

"Беҙ нимәгә өҫтөнлөк бирергә тейешбеҙ? Ҡабатлайым: халыҡтың именлеген, Рәсәй ғаиләһендәге етешлекте төп үсеш факторы тип иҫәпләйем", - тине дәүләт башлығы. 2000 йылда 42 миллион кеше, ил халҡының 30-29 процент самаһы бөлгәнлөк сигендә ине, тип иҫкә төшөрҙө Владимир Путин. 2012 йылда ошо кимәлде 10 процентҡа тиклем кәметә алдыҡ. Иҡтисади күрсәк әҙәмтәләре арҡаһында ярлылар йәнә артты. Бөгөн 20 миллион кеше шундай хәлдә. Әлбиттә, был 2000 йылдарҙағы кеүек 42 миллион түгел, ләкин ярайһы уҡ күп кенә. "Беҙ яңы тарихта тәүгә тапҡыр минималь хеҙмәт хаҡын йәшәү минимумына тиңләштерә алдыҡ. Ошо норма 2018 йылдың 1 майынан ғәмәлгә индерелә, был дүрт миллионға яҡын кешенең килемендә сағылыш табырға тейеш, - тине Владимир Путин. - Был мөһим аҙым, әммә проблеманы фундаменталь хәл итеү түгел. Беҙгә мәшғүллек структураһын яңыртырға, халыҡты һәйбәт эш менән тәьмин итергә, заманса, лайыҡлы хеҙмәт хаҡы түләнгән эш урындары булдырырға кәрәк".Ил Президенты алдағы ун йыллыҡҡа граждандарҙың реаль килемен арттырыу, ә алты йыл эсендә кәм тигәндә ярлылыҡ кимәлен ике тапҡырға кәметеү бурысын ҡуйҙы.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Мөрәжәғәтнамә йомғаҡтары буйынса журналистарға, Владимир Путиндың сығышы илдең алдағы йылдарға аныҡ үсеш йүнәлешен билдәләне, тип белдерҙе. "Президент власть, бизнес, йәмғиәт иғтибар итергә тейешле аныҡ йүнәлештәрҙе атаны. Тәү сиратта - илебеҙгә хәүеф менән янаған технологик артта ҡалыуҙы еңеп сығыу, - тип билдәләне республика башлығы. - Бынан тыш, Мөрәжәғәтнамәлә йәмғиәткә, халыҡҡа бөтә йүнәлештәр буйынса, һәр яҡлап булышлыҡ итеү темаһы асыҡ яңғыраны". Рөстәм Хәмитов һүҙҙәренсә, Владимир Путин үҙенең Мөрәжәғәтнамәһендә уңайлы ҡала мөхитен, һәләтле йәштәрҙе йәлеп итеү үҙәктәрен булдырыуға, һөнәри белем биреүҙе үҫтереүгә айырыуса иғтибар йүнәлтте.

# БЕРЛӘШЕРГӘ!



**2018 йылда ауыл хужалығы кооперативтарының килемлелеге 1 миллиард һумдан артырға тейеш. Был турала төбәк Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышында белдерҙе.**

Былтыр Ауыл хужалығы кооперацияларын үҫтереү буйынса федераль программа сиктәрендә Башҡортостан тәжрибә төбәктәре иҫәбенә индерелгәйне. Был эшкә тышҡы эксперт сифатында Бөтә донъя банкы йәлеп ителгән. Уның менән берлектә урындағы башланғыстар нигеҙендә килем килтереүсе проекттар аша булышлыҡ итеү, башланғыс этапта ҡорамалдар, техника йәки һатыу һәм логистика инфраструктураһы объекттары һатып алыу өсөн ярҙам механизмы эшләнгән. Өҫтәмә финанслау шарттарында республика бер кооперативҡа 3 миллион һумғаса аҡса бүләсәк.

- Быйыл программаға яҡынса 300 ауыл биләмәһен йәлеп итеү, 100 ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативын ойоштороу күҙаллана. Дәүләт ярҙамы 300 миллион һум тәшкил итәсәк, - тип хәбәр итте төбәк етәксеһе. - Кооператив проектарҙа ҡатнашыусылар - шәхси ярҙамсы хужалыҡтар, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары, ауыл хужалығы кооперативтары - 3 мең кешенән дә кәм булмаҫ тип көтөбеҙ. Шул уҡ ваҡытта кооперативтар килемлелеге дүрт тапҡырға үҫергә, 1 миллиард һумдан артырға тейеш.

Уҙған йыл йомғаҡтарына ярашлы, республика илдә ауыл хужалығы кооперацияларын үҫтереү буйынса 12-се урынды биләй. Яңы 39 кооператив ойошторолған, Башҡортостанда уларҙың дөйөм иҫәбе 103-кә еткән. Мәғлүмәттәр буйынса, Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығына Башҡортостандың ауыл хужалығы предприятиеларынан 6,3 миллиард һумлыҡ суммаға льготалы ҡыҫҡа сроклы кредит алыу өсөн 245 ғариза килгән. Был программа икенсе йыл эшләй. Предприятиелар бер нисә банктан йылына 5 процент льготалы ставка буйынса бурысҡа аҡса ала, дәүләт иһә уларға алып еткермәгән килемдә кире ҡайтара. Башҡортостан предприятиеларына кредит өсөн банктарға компенсация 352 миллион һум тәшкил итә. Займдарҙың суммаһы уртаса 3-4 миллион һум тәшкил итә. Заемсылар араһында крәҫтиән-фермер хужалыҡтары ла бар, улар 1,3 миллиард һумлыҡ суммаға 165 ғариза биргән.

# ХАЛЫҠ ЯРҘАМ ҺОРАЙ...

**Башҡортостанда "Реаль эштәр" төбәк проектында ҡатнашыу өсөн 800-гә яҡын ғариза бирелгән. Әле мөрәжәғәттәрҙе ҡарау этабы бара. "Берҙәм Рәсәй"ҙең партия проекты координаторы Рузалиә Хисмәтуллина йөмәғәт советы ултырышында ошо хаҡта хәбәр итте.**

Ағымдағы йылда һайлаусыларҙың наказдарын тормошҡа ашырыуға 175 миллион һум самаһы аҡса бүленгән. Шуның 153 миллионы республиканың Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары исеменә килгән мөрәжәғәттәргә тотонолған. Ә 22 миллион һумдан ашыуыраңы Дәүләт Думаһы депутаттарына һәм Федерация Советы ағзаларына наказдарға йүнәлтелә. Былтыр "Реаль эштәр" сиктәрендә 892 наказ тормошҡа ашырылған. Проектты финанслау элекке кимәлдә ҡалған. Уртаса алғанда, һәр муниципаль берәмеккә 2 миллион һумдан саҡ ҡына ашыуыраҡ тура килә. Мөрәжәғәттәр социаль йүнәлеште һаҡлап ҡалған. Нигеҙҙә халыҡ аҡсаны балалар баҡсаларын, ауыл мәҙәниәт йорттарын, мәктәптәрҙе, иҫтәлекле стелаларҙы, йәйәүләләр зонаһын һәм шишмәләрҙе яңыртыуға йүнәлтеүҙе һорай. Әле килгән ғаризаларҙы февраль аҙағына тиклем тикшереү һәм март башында ағымдағы йылда проектҡа индерелгән объекттар исемлеген төҙөү ҡаралған, тип асыҡлыҡ индерҙеләр партияның төбәк бүлексәһендә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2017 йылда Башҡортостан йылғаларына 200 меңдән ашыу кәсеп балыҡтары селбәрәһе ебәрелгән, тип хәбәр итте республиканың Экология министрлығы коллегияһында ведомство етәксеһе Илдар Һаҙыев. Мәҫәлән, Түбәнге Кама һыуһаҡлағысына - 3350 йөш һаҙан балығы, Ағиҙелгә 60 мең уҡбалыҡ һәм 36 мең киң маңлай селбәрәһе ебәрелгән.

✓Башҡортостандың инвестиция проекттары исемлеге ике ауыл хужалығы предприятиеһы менән тулыланды. Инвестор - "Туҡмаҡ" агрофирмаһы Хәйбулла районында яңы һөт производствоһын асырға (шул иҫәптән ярым ҡаты сырҙар, уға популяр "Рәсәй" һәм "Голланд" сорттары ҡарай) һәм Шишмә районында ҡуян аҫыларға ниәтләй. Инвестицияларҙың дөйөм күләме - 535 миллион һум, эш урындары һаны - 138. Төҙөлөш осоро - 2018-2023 йылдар.

✓"ТурСтат" аналитика агентлығы версияһына ярашлы, Өфөләге "Ватан" паркы Рәсәйҙең иң яҡшы 10 этнопаркы иҫәбенә инде. Асыҡ һауалағы этнопарктар һәм этнографик музей комплекстары рейтингы туристар өсөн тәҡдимдәрҙән һәм уларҙың популярлығынан сығып төҙөлгән. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Ватан" этнопаркы Өфөлә 2015 йылда Конгресс-холл янындағы майҙанда ойошторолдо. Паркта ете тирмә урынлашҡан, уларҙың береһендә Башҡортостан халыҡтарының мәҙәниәте һәм көнкүреше менән танышырға мөмкин.

✓Башҡорт Википедияһы ирекмәндәре "Башҡортостан 100" интеллектуаль конкурсының сираттағы этабы башланыуы хаҡында иғлан итте. "Был - ысын мәғәнәһендә халыҡ-ара конкурс. Бынан алдағы этаптарҙа, башҡорт ирекмәндәре менән бергә, бүрәт, украин, лезгин, эрзян, белорус, азербайҗан, грузин, мари, рус, әрмән, тыва, чечен, Люксембург, Ҡырым татарҙары бүлектәре вәкилдәре ҡатнашты. Улар Википедияла Башҡортостан тураһында 2500 самаһы мәҡәлә яҙҙы", - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына Башҡорт Википедияһы администраторы Рөстәм Нурыев.

✓Башҡортостан ҡалаларында Тоталь диктантҡа әҙерлек башланды. Өфөлә башланасаҡ бушлай курстарҙа орфографияны һәм пунктуацияны яҡшыртырға мөмкин. Дәрестәр һәр шаршамбы: 6, 14, 21 һәм 28 мартта, 4 һәм 11 апрелдә уҙғарыла. Уҙғарыу урыны: Башҡорт дәүләт медицина университетының ғилми китапханаһы, Пушкин урамы 96/98, 7-се корпус, 1-се ҡат. "Актерҙар йорто" туҡталышы. Башлана киске 7-се яртыла.

СОЦИАЛЬ ХӘЛ

**Бөгөн ҡартлығында нисек һәм нимәгә йәшәрен ҡайғыртмаһа, ялҡау ғына ҡайғыртмайҙыр. Пенсия балдары, тәғәйенләнгән түләүҙәр хаҡлы ялға әле алыҫ булғандарҙы ла хатта уйланырға мәжбүр итә. Пенсия тәғәйенләүҙең бөтөн нескәлектәре хаҡындағы һорауҙарға РФ Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе етәксеһе Фоат ХАНТИМЕРОВ яуап бирә.**



# ҠАРТЛЫҒЫНДЫ ХӘСТӘРЛӘ...

**➔ Рәсәй хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры М. Топилиндың ҡайны бер рәсәйҙәргә страховкалы пенсия тәғәйенләүҙән баш тартыу хаҡындағы хәбәренән һуң, пенсия темаһына иғтибар көсәйҙе. Башҡортостанда бындай осраҡтар булдымы?**

- Булды, булып тора, буласаҡ. Йыл һайын пенсия тәғәйенләү өсөн 80 меңләп кешенең документтары ҡарала, ҡайһы берҙәрен кире ҡағырға ла тура килә. Былтыр, мәҫәлән, страховкалы стажы һәм пенсия стажы етмәгәнлектән, 190 кешегә йәше буйынса пенсия түләнмәне. Йәш (ҡартлыҡ) буйынса пенсия тәғәйенләү өсөн законда ҡаралған шарттарҙы үтәү мотлаҡ. 2017 йылда уның буйынса страховкалы минималь стаж - 8 йыл, ҡатын-ҡыҙ - 55, ирҙәр 60 йәш, ә минималь пенсия балдары суммаһы 11,4 булырға тейеш ине. Был критерийҙәр йыл һайын үҙгәреп тороуын да әйтергә кәрәк. Быйыл, мәҫәлән, страховка пенсияһы тәғәйенләү өсөн 13,8 балл тупларға кәрәк. Уның күләме түләнгән взностар менән хеҙмәт стажы оҙайлығына бәйле. Ә шулай ҙа бөтөнләй пенсияһыҙ тороп ҡалыусылар булмаясаҡ. Мәҫәлән, әгәр кеше гүмере буйына бер ерҙә лә эшләмәгән һәм уның эш хаҡы ла, стажы ла юҡ икән, ирҙәргә - 60, ҡатындарға 55 йәш тулһа ла, улар страховкалы пенсияға өмөт итә алмай, социаль пенсия юлларға ғына хаҡтары була.

**➔ Бөгөн республикала пенсия кимәле ниндәй?**

- Әлеге көнгә Башҡортостан буйынса 1,176 млн пенсионер иҫәпләнә. Был һанға йыл һайын 10-ар мең кеше өҫтәлеп тора. Беҙҙең бүлексә аша пенсиялар һәм башҡа төрлө түләүҙәргә тәғәйенләнгән 210 млрд һум аҡса үтә. Хаҡлы ялдағыларҙың пенсия күләмдәре, эш хаҡтары кеүек үк, төрлөсә, уртаса күләм шулай ҙа бик маҡтанырлыҡ түгел: 13,5 мең.

**➔ Күптәрҙе 2020 йылға тиклем пенсияның тупланма өлөшөнә мораторий булдырылыуы борсой. Был аҡсалар аҙаҡ юғалмасмы?**

- Граждандарҙың пенсия тупланмалары тулыһынса уларҙың үҙ ҡарамағында ҡала. Тупланма пенсияларҙы булдырыуға мораторий шуны аңлата: уларҙы эш биреүсе тарафынан күсерелә килгән яңы страховкалы взностар менән тулыландырыу туҡтатыла. Страховка взносының әлеге 6 проценты (16-нан) тупланма пенсияны тулыландырыуға түгел, ә әлеге граждандың страховкалы пенсияһын булдырыуға китә. Әгәр әлегерәк пенсияға сыҡҡас, ошо 6 процентты граждандарға дәүләттеке булмаған пенсия фонды ҡайтарырға тейеш булһа, хәҙер ул Рәсәй Пенсия фондынан түләнә.

**➔ Дәүләт нигеҙҙә эшләмәүсе пенсионерҙарға ярҙам итергә тырышамы? 1 ғинуарҙан уларҙың пенсияһы 3,7 процентҡа индексацияланды...**

- Дәүләт эшләп йөрөгәндәргә лә ярҙам итергә тырыша. Йыл һайын август айынан алып автоматик режимда уларҙың пенсиялары үткән йылдың страховка взностары иҫәбенә ҡабатан хисаплана. Ғәмәлдәге был отчет системаһы теге йә был айҙа пенсионерҙың эшләгәнме, юҡмы икәнлеген күҙәтеп барырға ярҙам итә. Был мәғлүмәттәр уның хеҙмәт мөнәсәбәттәренең асыҡлығын билдәләргә лә унай. Бөтә мәғлүмәттәр ҙә персонифицирланған мәғлүмәт базаһында һаҡлана. Шуға күрә лә, әгәр эш биреүсе хеҙмәт хаҡының күпмелер өлөшөн -рәсми документ аша, ә ҡалғанын "конвертта" түләргә тип хәл итһә, был эшләп йөрөгән кешенең пенсия күләмендә сағылыш таба һәм уның файҙаһына булмаясаҡ. Эш биреүсе бындай юл менән киләсәктә эшсәндәрен пенсияға хоҡуғынан мәхрүм итеүен аңларға тейеш. Шуға ла эшкә урынлашҡан саҡта Хеҙмәт кодексы положениеларын күҙәтеүгә ныҡ иғтибар биреү кәрәк.

**Гөлназ ДАНИЛОВА.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

## ПЕНСИЯ ЙӘШЕ АРТА

**Ғәмәлдәге закон нигеҙҙәренә ярашлы, дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә ҡартлыҡ буйынса страховкалы пенсия тәғәйенләү йәшен этаплап арттырыу ҡарала.**

Был хеҙмәткәрҙәрҙең пенсия йәше йыл һайын 6 айға арта барып, 2026 йылға ирҙәр өсөн - 65, ҡатын-ҡыҙҙарға 2032 йылға тиклем 63 йәшкә етәсәк. Ағымдағы йылда эшләп йөрөүсе дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә страховкалы пенсия тәғәйенләү йәше ирҙәргә - 61, ҡатын-ҡыҙҙарға 56 йәш тәшкил итә. Шуныһын да әйтергә кәрәк: пенсия йәшен арттырыу дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттә эшләгән ваҡыт өсөн генә ҡарала. Был хеҙмәттән эштән сыҡҡан граждандарға йәше буйынса страховкалы пенсия тәғәйенләү дөйөм тәртиптә башҡарыла. Пенсия тәғәйенләнгәндән һуң граждандар хеҙмәтенә урынлашҡан осраҡта страховкалы пенсия түләү туҡтатылмай.

**Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

*КӨНАУАЗ*

# ЙӘШТӘР ҺӘМ...

## һәләтлеләр




**Көньяҡ Кореяла XXIII ҡышҡы Олимпия уйындары тамамланды. Дөрөҫөн әйткәндә, Рәсәй быйылғы ҡышҡы Уйындарҙа ике аренала - спорт һәм сәйәсәт фронтында ҡаты алыш алып барҙы. Спортсылар алтын миҙалдар иҫәбе буйынса 92 ил араһында - 13-сө урында. Икенсе фронт тураһында әйткәндә, Бөтөн донъя олимпия комитеты (МОК) барыбер ҙә Рәсәй делегацияһына һалынған санкцияларҙы ғәмәлдән сығарманы, Олимпиаданы ябыу тантанаһында милли флаг менән үтергә рөхсәт бирмәне.**

Формаль рәүештә, Олимпиадала Рәсәйҙең милли йыйылма командаһы ҡатнашманы. Допинг менән бәйле тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, Рәсәйҙең Олимпия комитеты хәҙер МОК ағзаһы түгел. Рәсәй спортсыларына нейтраль флаг аҫтында ғына сығыш яһарға рөхсәт ителде. Улар араһында иң күп миҙалды саңғысы Александр Большунов яуланы, ул өс көмөш һәм бер бронза миҙал менән ҡайтты. Алтын миҙал эйәләре араһында хоккей командаһы, шулай уҡ фигуристка Алина Заһитова бар. Бынан тыш, көмөш миҙал фигуристка Евгения Медведевала, скелетонист Никита Трегубовта, шулай уҡ фигуристар, ирҙәр араһында эстафетала һәм ирекле стилдәге спринтта саңғысылар команда турнирында икенсе урынға сыҡты. Бронза - ҡатын-ҡыҙҙар саңғы эстафета командаһында, конькиҙа йүгереүсе, өфөлө Семен Елистратовта, Наталья Воронинала, фристайлсылар Илья Буров менән Сергей Ридзикта, саңғысылар Юлия Белоруковала, Андрей Ларьковта, Денис Спицовта.

Йәштәр һәм һәләтлеләр - спорт экспертары Рәсәй спортсыларының йәш булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Алина Заһитоваға - 15, Германия менән алышта еңеү голы авторы Кирилл Капризовҡа - 20, саңғысы Александр Большуновҡа 21 генә йәш. Үҙҙәре сығыш яһаған спорт төрҙәре кимәле менән иҫәпләгәндә, улар ысынлап та бик йәш һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшер өсөн бөтөн мөмкинлектәре алда әле. Әйткәндәй, Ижевск ҡалаһында тыуған Алина Заһитова тамырҙары менән йәнәй ырыуы башҡорттары нигеҙ һалған һәм 1859 йылда Ырымбур губернаһы Минзәлә өйәҙе 18-се башҡорт кантоны составына инган Әжибәй ауылынан. Алина беҙҙекеләр араһында шәхси алтын миҙал яулаусы берҙән-бер спортсы.

Олимпиада хоккей көйәрмәндәренә лә бик матур бүләк әҙерләне. Рәсәй был алтын миҙалды 26 йыл буйына көттө. Уйын ваҡыты тамамланыр алдынан ғына өсөнсө шайба индереп, был тамашаны овертаймға күсереүгә өлгәшкән хоккейсылар өҫтәмә ваҡытта еңеүле гол индерә алды.

Иң үкенеслеһе, Рәсәй үҙенең абруйын ҡайтарыу өсөн көрәшкән олимпия допинг фронты ла Уйындар барған ваҡытта әленән-әле үҙенә иғтибар йәлеп итеп торҙо. Керлингист Александр Крушельницкий организмында мельдоний табылды. Спортсы кәләше Анастасия Брызгалова менән дабл-микста яулап алынған бронза миҙалын кире ҡайтарырға мәжбүр булды.

Быйыл Уйындарҙа беренсе тапҡыр Корея Республикаһы спортсылары ла ҡатнашты. Төп ваҡиға булып хоккей буйынса ҡатын-ҡыҙҙар командаһы булдырыу торғандыр. Унда 23 Көньяҡ Корея вәкиле һәм 12 Корея спортсыһы инде. Кореяның берләшмә хоккей командаһы бөтөн матчтарҙа ла еңелде һәм аҙаҡҡы урынға ҡалды.

МОК етәксеһе Томас Бах, Көньяҡ Кореяла ҡышҡы Уйындарҙа ҡатнашыусы Рәсәй спортсыларынан алынған допинг-һынауҙар тикшерелеп бөтмәйенсә, Рәсәй олимпия комитетына ҡаршы санкциялар ғәмәлдә ҡаласаҡ, тип белдерҙе. Хәҙер ошо һынауҙарҙың таҙа булыуы төп шарт. Ҡалған шарттарҙы Рәсәй үтәп бөттө, шул иҫәптән 15 млн доллар күләмендәге штраф та түләнде. Шулай итеп, был йәһәттән башҡа көтөлмәгән хәлдәр булмаһа, Токиола үтәсәк 2020 йылдағы йәйге Уйындарҙа Рәсәй тулы делегация менән ҡатнаша аласаҡ.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Көнбағыш

❖ Көнбағыш бигерәк тә ир-егеттәргә файҙалы. Уның орлоғонда В4 витамины, сәскәлерендә шәкәр ҡушылмалары бар. Көнбағыш майы йөрәк һәм ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртеү һәм дауалау өсөн ҡулланалар. Япраҡтары һәм сәскәләрен тәнәтмә хәлендә бизгәк (малярия) сирен дауалауҙа файҙаланалар, аппетитты ла күтәрә ул. Ҡыҙҙырылған көнбағыш майы төрлө йәрәхәттәрҙе, бешкән урындарҙы ла тиҙ төҙәтә - сепрәккә һеңдереп бәйләп ҡуйырға, һөртөргә лә була.

### Йөрәгең ниндәй?

❖ Халыҡ телендә ҡуш йөрәк, оло йөрәк, ҡуян йөрәк, ҡара йөрәк тигәнде йыш ишетәбеҙ. Ә бына үгеҙ йөрәк осрамай, ул ниндәй һуң? Үгеҙ йөрәк - ҙур сир, уң йәки һул яғының ҙурайыуы. Бигерәк тә күпләп һыра эскәндәр яфалана уның менән. Йөрәккә көсөргәнеш күп төшә һыранан, ошо көсөргәнеште үткәреп ебәреү өсөн йөрәк мускулы ҙурая (хатта 2-3 тапҡырға) һәм йөрәк ҡыуышлыҡтары ла киңәйә. Йөрәк арый башлай һәм тиҙ туҙа - йөрәк мускулы шинеп төшә, эшсе мускулдарҙың күҙәнәктәрен тоташтырған туҡыма йәки май туҡымаһы менән алмашыныуы шәберәк арта. Йөрәк артыҡ көскә ҡаршы тора алмай башлай, шештәр, һарыһыу, тын ҡыҫылыу барлыҡҡа килә. Башҡа төрлө спиртлы эсемлектәр ҙә был сиргә сәбәпсе. Эскенән ҡотолоп ҡына йөрәк шешеүен йәки үгеҙ йөрәктән ҡотолоп була.

### Ҡышҡы йүтәл

❖ 50-60 грамм борос тамырын сирек литр аҡ шарапта ҡайнатырға, һөҙгәс, ҡайнар көйө көнөнә 3 тапҡыр эсергә, ә төнгә ҡаҙ майы менән ҡушып, 1 ҡалаҡ ашарға.

❖ Ҙур башлы һуғанды ҡырып, ҡаҙ майы менән бергә болғайһың һәм шуны һалҡын тейгәндә, йүтәлләгәндә күкрәккә, муйын тирәһенә һөртөргә. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ ашау ҙа файҙалы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *"Йыл һайын башҡорт теле уҡытыусылары өсөн конкурстар ойоштороla, йыл һайын еңеүсе билдәләнә, улар барыһы ла абруйлы исемдәр алып бөттө - ә ҡайҙа беҙҙең башҡорт телен уҡытыу буйынса үҙебеҙҙең методика?"*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Мосолмандарҙың Мәккәгә барғаны

Сөхәйли ибн Әмре килешеүҙә билдәләнгән үҙ хоҡуҡтарынан файҙаланып, улын әшәке һүҙҙәр менән әрләп, барыһы алдында ныҡ итеп туҡмай. Мосолмандарҙың йөнө көйә, тик өндәшә алмайҙар.

Килешеү төҙөлгәндән һуң, Мөхәммәт бәйғәмбәр өммәттәштәренә хаждың ошо урында тамамланасағы тураһында әйтә. Үҙе шул урында уҡ, йөҙөн Ҡәғбә яғына бороп, ғибәҙәт ҡыла. Мосолмандар теләмәй генә уға эйәрә. Төҙөлгән килешеүҙе үҙҙәре өсөн кәмһетеү тип һанай. Уларҙың күбеһе ҡорал менән Мәккәгә инеп, ҡөрәйштәрҙе ҡырып һалырға әҙер була. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең абруйы ғына уларҙы был аҙымдан аралай. Ошонда уҡ дөйәләрҙе салып, ҡорбан килтерәләр.

- Мин Аллаһы Тәғәләнең ҡоло һәм бәйғәмбәре. Уның тарафынан ебәрелгән фарманды боҙа алмайым, - тип аңлата Мөхәммәт бәйғәмбәр был аҙымын өммәттәштәренә.

Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тойғоларын аңлай мосолмандар. Мәккә - уның тыуған ҡалаһы. Бында уның туғандары һәм дуҫтары йәшәй. Мосолмандарға иң ауыр осорҙа мәжүси дуҫтары, туғандары һәм уларҙың балалары, ғүмерҙәренә ҡурҡыныс янаһа ла, йәшерен рәүештә ярҙам итеп торалар. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең төп маҡсаты - үҙ ырыуҙаштарын ҡырып һалыу түгел, ә яйлап булһа ла Ислам диненә килтереү була...

Әйтергә кәрәк, ҡөрәйштәр менән төҙөлгән килешеү Мөхәммәт бәйғәмбәргә түгел, Мәккә мәжүсиҙәренә күберәк зыян килтерә. Сөнки, беренсенән, Мәккә халҡы мосолмандарҙың ҡурҡыныс түгел, ә, киреһенсә, һүҙҙәренә тоғро, күндәм, улар менән эш алып барырға мөмкин икәнлеген аңлай. Был иһә Ислам тәғлимәтенә ҡыҙыҡһыныу уята.

Икенсенән, Мөхәммәт бәйғәмбәр, ысынлап та, һүҙендә тороп, ҡөрәйштәрҙән ҡасып килгәндәрҙе үҙенә ҡабул итмәй башлай. Көндәрҙең береһендә Әбү Басыр әс-Сәҡәфи исемле ҡөрәйш кешеһе килеп, Ислам динен ҡабул итә. Уның артынан Мәккәнән ике һаҡсы килеп етә лә, Әбү Басырҙы кире ҡайтарыуҙы талап итә. Мөхәммәт бәйғәмбәр уға һаҡсылар менән бергә ҡайтырға ҡуша.

- Мине динемдән ваз кисергә мәжбүр итәсәк кешеләргә кире ҡайтарып бирәһеңме ни инде? - тип һорай Әбү Басыр.

- Алла һиңә һәм туғандарыңа ҡотолоу ебәрер, - тип яуап ҡайтара Мөхәммәт бәйғәмбәр.

Мәккәгә етеп килгәндә Әбү Басыр һаҡсыларҙың береһенең ҡоралын тартып ала. Һуғыша башлайҙар. Әбү Басыр тегеләрҙең береһен үлтерә, икенсеһен ҡыуып ебәрә. Шунан һуң ҡөрәйштәрҙең Сүриәгә барыусы карауандары үтә торған бер урынға барып урынлаша. Тәүҙә бәләкәй генә карауандарҙы талай. Мәккәлә уның тураһында һүҙ тиҙ тарала һәм мосолман динен ҡабул итергә теләүсе Мәккә ҡөрәйштәре Мөхәммәт бәйғәмбәр янына түгел, ә Әбү Басыр янына ағыла. Улар янына Әбү Жандал да барып һыйына. Был мосолмандарҙың хәҙер иң ҙур карауандарға ла көсө етә башлай. Ҡөрәйштәр тәүҙә Мөхәммәт бәйғәмбәргә дәғүә белдереп ҡарай, әммә хаҡлы булмауҙарын үҙҙәре лә яҡшы аңлай. Шуға ла ҡөрәйштәр килешеүҙең был өлөшөн юҡҡа сығарыу тураһында һүҙ ҡуҙғата. Килешеү үҙ көсөндә ҡала, тик шулай ҙа ваҡыт үтеү менән ике яҡ та килешеүҙең был өлөшөнә күҙ йомоп ҡарай башлай.

**(Дауамы бар).**

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# ДӘРЕСЛЕКТӘ ЛӘБАҺА ХИКМӘТ!

**Ошо арала Башҡорт дәүләт университетында "Башҡорт һәм туған телдәрҙе өйрәнеүҙең хәҙерге проблемалары" III Бөтә Рәсәй (халыҡ-ара ҡатнашлыҡта) фәнни-методик конференцияһы үтте. Уның эшендә республика районданынан һәм ҡалаларынан уҡытыусылар, ғалимдар ҡатнашты.**



- Республикала алып барылған тел сәйәсәте өс йүнәлештә тормошҡа ашырыла, - тине пленар ултырышты асып, БР Башлығы хакимиәтенең Ижтимағи-сәйәси үсеш буйынса идаралыҡ начальнигы урынбаҫары Ришат Сабитов. - Беренсеһе - рус телен илебеҙҙең дәүләт теле булараҡ сифатлы өйрәнеү. Икенсеһе - башҡорт телен республикаһының дәүләт теле булараҡ өйрәнеү һәм артабан үҫтереү. Был йәһәттән 2019 йылда республиканың 100 йыллығын үткәреү сиктәрендә Өфөлә башҡорт теленә арналған халыҡ-ара ҙур конференция үткәрергә тигән инициатива бар. Унда башҡорт теленең артабанғы үҫеш юлдары һәм проблемаларҙы хәл итеү ысулдары ҡаралырға тейеш. Өсөнсө йүнәлеш - республикала йәшәгән халыҡтар һәм милләттәр телдәрен туған тел булараҡ һаҡлап ҡалыу. Бөгөн ошо йүнәлештәрҙә үҙ эсенә алған дәүләт программаһы проекты әҙерләнде. Быйыл башҡорт, рус һәм башҡа телдәр буйынса проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса республика Башлығының гранттары булдырылды, Башҡорт телен үҫтереү һәм һаҡлау буйынса фонд барлыҡҡа киләсәк. Бөгөнгә ойоштороу эштәре тамамланыу өҫтөндә. Былар барыһы ла беҙҙең дөйөм эшмәкәрлегебеҙгә бәйле. Бөгөн башҡорт телен һаҡлауҙа һәм үҫтереүҙә фән менән мәктәп, ғалим менән уҡытыусы берлеге бик зарур..."

Тәбрикләүҙәр тамамланғас, һүҙҙе педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажин дауам итеп, башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыуҙың төп проблемаларына туҡталды һәм бөгөнгө йәштәрҙең башҡорт телен белеүе аяныслы кимәлдә тип билдәләне: "Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен тикшереүгә арналған төрлө семинарҙар, кәңәшмәләр үткәрелә килә. Ошо саралрҙа ҡатнашыусы башҡорт теле уҡытыусылары, дәреслектәргә ингән әҙәби текстарҙы адаптацияларға кәрәк, уҡыусылар аңламай, тип йыш дәғүә белдерә. Тел белеү кимәленең түбәнәйеүенә килтереүсе сәбәптәр күп. Объектив сәбәптәр ҙә бар, шулай ҙа үҙебеҙгә бәйлеләре лә етерлек. Проблеманы мин төп башҡорт мәктәптәрендә туған тел уҡытыу концепцияһының халыҡ, тел ихтыяжына тап килмәүендә күрәм. Һәр нәмәнең нигеҙендә кәрәклек ята. Башҡорт балаһына башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыу нимәгә кәрәк? Беренсенән, телебеҙҙе яратырға өйрәтеү, уның бер телдән дә кәм булмауын күрһәтеү, телебеҙгә тоғролоҡ тәрбиәләү, уның бөтөн байлығын үҙләштереү, туған телебеҙҙә матур, һығылмалы итеп һөйләшергә өйрәтеү, уны киләсәк быуындарға тапшырылыҡ кимәлдә белеү өсөн. Икенсенән, туған телгә һөйөү тәрбиәләү нигеҙендә халҡыбыҙға һөйөү тәрбиәләү, халҡыбыҙ тыуҙырған рухи байлыҡты үҙләштереү, халыҡ хәтерен үҙ хәтерен итеп алыу өсөн. Өсөнсөнән, уҡыусының ижади һәләтлектәрен үҫтереү, тел менән файҙалана белеү кимәлен арттырыу өсөн. Дүртенсенән, шуларҙан һуң ғына телебеҙҙең фонетик, грамматик, орфографик үҙенсәлектәрен өйрәнеү, танышыу өсөн. Әгәр беҙ кәрәклекте ошо тәртиптә билдәләһәк, программаларҙың да, дәреслектәрҙең дә төҙөлөшө бөтөнләй башҡа булыр ине. Бөгөн был кәрәклек кире тәртиптә бирелә, тәүге урынға телде теорияны өйрәнеүҙән башларға тура килә, шуға ла уҡытыусы программаны теорияны өйрәнеү тирәһендә төҙөргә мәжбүр..."

Ошо фекерҙе дауам итеп, тел буйынса ойошторолған түңәрәк ҡорҙарҙың береһендә филология фәндәре докторы, профессор Ғиниәт Ҡунафиндың әйткән һүҙҙәрен килтереп үтәйек: "Йыл һайын башҡорт теле уҡытыусылары өсөн конкурстар ойоштороla, йыл һайын еңеүсе һәм лауреаттар билдәләнә, улар барыһы ла абруйлы исемдәр алып бөттө - ә ҡайҙа беҙҙең башҡорт телен уҡытыу буйынса үҙебеҙҙең методика? Хатта Сингапур методикаһын ҡулланабыҙ, ҡайҙа башҡорт методикаһы?" Урынлы һорау.

Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының башҡорт теле уҡытыусыһы Рифат Әйүпов та тел яҙмышы күп осраҡта үҙебеҙҙән тороуға баҫым яһаны. "Белем усаҡтарын территория буйынса беркетеү күп нәмәгә аяҡ салды, әммә беҙ коллектив менән башҡорт гимназияһында башҡорт балалары уҡырға тейешлеген һәм уның район һәм ҡала өсөн берҙән-бер милли уҡыу йорто булыуын раҫлап, статусын ғына түгел, йөкмәткеһен дә һаҡлап алып ҡалдыҡ. Икенсенән, юғарынан ниндәй генә күрһәтмә (рекомендация) төшөрөлмәһен, мәктәп етәкселеге уны шунда уҡ үтәргә тотонорға тейеш түгел. Күрһәтмә - ул бойороҡ түгел һәм ул мотлаҡ үтәүҙе талап итмәй", - тине ул.

Туймазы районының Бишҡурай урта мәктәбенән юғары категориялы башҡорт теле уҡытыусыһы Л. Абзалова ла бөгөн көн үҙәгендә торған проблеманы күтәрҙе: класс-комплекттары әҙ булғанлыҡтан, башланғыс синыфтарҙа бер дәрестә 2-4-се, урта синыфтарҙа 6-7-се, 8-9-сы синыфтарҙы ҡушып уҡытырға мәжбүр булыуын белдерҙе. "Әлбиттә, эш хаҡы өсөн генә йөрөһәм, аҡса алыр ҙа шым ғына эшләп тик йөрөр инем, әммә йөрәгем әрнеүен баҫа алмайым: беренсенән, закон боҙола, икенсенән, 45 минутта өс синыфҡа 15 минуттан мин ниндәй белем биреп өлгөрә алам? Шуға һөҙөмтәләр ҙә юҡ. Элек район буйынса гел алдынғылыҡта йөрөнөк, балалар матур уңыштарға өлгәшә ине. Ни өсөн балаларҙың яҙмышын тел белгестәре түгел, ә экономистар хәл итә?" - тигән һорау ҡуйҙы ул. Ҡалаларҙа эшләүселәр алдында бындай проблема тормаһа ла, ауыл ерендәге башҡорт теле уҡытыусылары өсөн был таныш хәл.

Шулай уҡ Ырымбур өлкәһенән килгән вәкил Башҡортостандың күрше өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттарҙы ташлап ҡуйыуына үпкә белдерҙе һәм шундай мәғлүмәт еткерҙе: Ырымбурҙа уҡыу программаларында туған телдәр булмағанлыҡтан, башҡорт телен уҡытыу киләһе йылдан ҙур хәүеф аҫтында тора. Эйе, Федераль дәүләт белем биреү стандарттары буйынса туған тел мотлаҡ уҡытылырға тейешле предметтар иҫәбенә инә. Әммә башҡорттар йәшәгән өлкәләрҙең милли республикалар составында түгел, ә Рәсәй өлкәләре булыуын да оноторға ярамай. Әгәр милли республикалар уҡыу программаларын һайлағанда мотлаҡ туған тел уҡытылған программаға өҫтөнлөк бирһә, рустар күпселекте тәшкил иткән төбәктәрҙең мәғариф министрлығы йәки район мәғариф бүлеге рус мәктәптәре өсөн тәғәйенләнгән программа һайлауы көн кеүек асыҡ. Бында инде Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәр менән эшмәкәрлеген йәнләндереүе, проблемаларҙы асыҡлап, Башҡортостан Хөкүмәте менән ошо төбәктәр араһында төҙөлгән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр нигеҙендә эш алып барыуы зарур. Бында төп нигеҙ итеп РФ Конституцияһында ныҡытылған хоҡуҡтарҙы ла килтерергә мөмкин. Шулай уҡ Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ил журналистары өсөн үткәргән сираттағы матбуғат конференцияһында Татарстан журналисының телдәр уҡытыу буйынса биргән һорауына яуап итеп: "Татарҙар бит Татарстанда ғына йәшәмәй", - тиеүен дә флаг итеп күтәреп, үҙ файҙабыҙға ҡулланырға кәрәк. Ил башлығы үҙе бит ошо яуабы менән Рәсәйҙең күп милләтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, ил территорияһында йәшәгән төрлө милләттәргә туған телдәрен өйрәнеүҙе мөмкинлек бирҙе түгелме? Әлбиттә, быны тел уҡытырлыҡ белгестәр булғанда еңел тормошҡа ашырырға мөмкин.

Ҡыҫҡаһы, тел дә тере организм, заман менән бергә ул да үҫә, үҙгәрә, ниндәйҙер һүҙҙәр һәм талаптар төшөп ҡалһа йәки онотолһа, заманға яраШлы икенселәре тыуа. Заманса мәғлүмәт киңлегендә заман балаларына нисек итеп телгә һөйөү уятыу һәм уны, ата-бабаларыбыҙ беҙгә быуаттар аша килтереп еткергән кеүек, йылдар аша киләсәк быуынға тапшырыу өсөн ниндәй һөҙөмтәле саралар ҡулланырға тейешбеҙ - уҡытыусы алдында бөгөн шундай бурыс тора. Ә быны, Ришат Хажғәли улы әйтеүенсә, фән менән мәктәп, ғалим менән уҡытыусы берлегенән, тимәк, дәүләт ярҙамынан тыш тормошҡа ашырыу икеле.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*✓ Ғалим Х. И. Хаджилаев болғарҙарҙың ата-бабалары итеп өс төрки телле халыҡты атай: башҡорттар, татарҙар һәм сыуаштар. Болғарҙар һәм башҡорттар Болғар территорияһында көндәлек тормошта аралашып көн иткән.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

**Сығышы менән ялан-ҡатай башҡорто, ләкин Рәсәйҙәге Октябрь революцияһынан һуң Төркиәгә сығып китеп, унда Төркиәнең билдәле тарихсы-этнографы булып киткән Абдулҡадир Инан донъялағы төрки телле халыҡтарҙың этнографияһы буйынса ғәйәт ҙур ижади мираҫ ҡалдыра. Төрки телле халыҡтарҙың рухи донъяһына ҡараған материалдарҙы йыштән туплаусы, тикшереүсе булараҡ, ул был өлкәлә иң ҙур абруйға әйләнә. Уның төрки телле халыҡтарҙың рухиәтенә ҡағылышлы бихисап күп хеҙмәттәре араһында ямғыр саҡырыу йолаһына ҡағылышлы Йәй (Яҙа) ташы тураһындағы материалдары бик ҡыҙыҡ.**

# ЙӘЙ ТАШЫ ҺӘМ...

## ямғыр саҡырыу йолалары хаҡында



Төрөк теленән башҡортсаға тәржемә ителеп, 1998 йылда Өфөлә Башҡортостан "Китап" нәшриәте тарафынан баҫып сығарылған "Шаманизм тарихта һәм бөгөн" тигән китабының XIV бүлеге ошо йолаға бағышланып, "Яҙа ташы һәм ямғыр тылсымдары" тип атала. Был хеҙмәтендә А. Инан ямғыр яуҙырыу йолаһы ныҡ таралған халыҡтар араһында башҡорттарҙы ла телгә ала һәм был йолаға ҡыҫҡаса һүрәтләмә бирә.

Башҡорттарҙың ул яҙып ҡалдырған ямғыр яуҙырыу йолаһы бер ниндәй тип әйтерлек үҙгәрешһеҙ беҙҙең көндәргә килеп еткән һәм этнографтар тарафынан XXI быуатта ла телгә алына. Мәҫәлән, башҡорт этнографтары Юлиә Әбсәләмова менән Ләйсән Алламоратоваға Бөрйән районында этнографик экспедицияла йөрөгәндә башҡорттар Байназар менән Мораҙым ауылдары араһында ятҡан йәй ташын күрһәтеп, ямғыр саҡырыу йолаһын башҡарғанда был ташты нисек файҙаланыуҙары хаҡында һөйләгән.

Минең үҙемә ямғыр саҡырыу йолаһын тәү тапҡыр 1975 йылда күрергә, уны үткәреүселәр араһында булып, йола үтәүҙә ҡатнашып, ваҡиғаларҙы ҡыҙыҡ күреп яҙып алырға тура килде. Ул йәйге каникулда, ғәҙәттәгесә, атайыма бесән сабышырға ҡайтҡайным. Өлкән йәштәгеләр, моғайын да, хәтерләйҙер - 1975 йылдың йәйе Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш төбәгендә ҡоролоҡ булды һәм Баймаҡ районының бөрйән ырыуына ҡараған элекке Иҙелбай ауылы кешеләре (был ауыл хәҙер күптән инде Баймаҡ ҡалаһы эсендә, һәм ҡаланың Көкрәауыл тип аталған бер бистәһелер) ямғыр саҡырыу йолаһын башҡарыуға сыкты. Башҡорттоң иң боронғо дәүерҙәргә үткәне, Исламға тиклемге рухи донъяһы менән ныҡлап ҡыҙыҡһына ғына башлаған сағым ине. Шуға күрә, өлкәндәр, бөтәгеҙгә лә барырға кәрәк, тип әйткәс, ҡыҙыҡһынып, мин дә киттем йола үткәрә торған ергә. Әлбиттә, ул ваҡытта Абдулҡадир Инандың донъяла барлығын да, уның хеҙмәттәрен дә белмәй инем әле. Юл ыңғайы булһа ла әйтеп китергә кәрәктер - был оло ғалимдың хеҙмәттәре үҙенең туған халҡына, Башҡорт иленә билдәле философ Д.Ж. Вәлиев һәм Р.Ә. Ғиләжетдиновтарҙың тырышлығы менән совет иле картанан да, донъянан да юҡ булғас ҡына тәржемәләнеп әйләнеп ҡайта алды.

Баймаҡ яҡтарында, Ирәндек итәгендә мин ул саҡта күргән ямғыр саҡырыу йолаһы А. Инан яҙып ҡалдырған Оло Ҡатай, Һалйот, Барын Табын ырыуы башҡорттары XX быуат башында үткәргән йоланан бер нәмәһе менән дә айырылмай ине, тип әйтергә була. Айырма тик шунда ғына булды: совет йылдарында йола үтәүгә йыйылған халыҡ ҡорбан салып, аят уҡып, күмәкләшеп Хоҙайҙан ялбарып ямғыр һорағандан һуң, дин әһеле (мулла) булмағанлыҡтан, һыуға менән балалыҡ дуҫымды ташланылар. Аҙаҡ һыу һибешеп, шаярышып-көлөшөп, бик ҡәнәғәт өйҙәренә таралыштылар.

Яҙыусы һәм журналист Әхмәр Үтәбай (Баймаҡ районы Буранбай ауылы башҡорто) һөйләүенсә, ошо ауылда йәшәүсе бөрйән ырыуы башҡорттары кәрәк осраҡтарҙа урындағы Һәрешкужа тауына сығып, ямғыр саҡырып, теләк теләү йолаһын башҡарып булғандар. Был йоланы үтәгән саҡта тәүҙә Ҡөрьән уҡығандан һуң күмәкләп Хоҙайға ялбарып, унан ямғыр яуҙырыуҙы һорағандан һуң, ҡорбан салынған. Аҙаҡ ит бешереп, бер-береһен һыйлағас, һыу һибешеп, аранан берәүһен тотоп, Һаҡмарға ташлағандар. Аҙаҡ ит бешергән ҡаҙанды түңкәреп, яра һуҡҡандар.

Ейәнсуранан тыуған яҡты өйрәнеүсе Марат Түләбаев үҙ районының ер-һыу атамалары хаҡында ҡыҙыҡлы китап баҫтырып сығарҙы. Унда автор урындағы топонимикаға ҡағылышлы легенда һәм риүәйәттәрҙә килтергән. "Теләкташ" тигән бер урында үҫәргән ырыуы башҡорттары ямғыр яуҙырыу йолаһы башҡарған.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**
**(Дауамы бар).**

*ҠЫҘЫЫЫҠ!*

# БОРОНҒОЛАР...

## ниндәй сиргә нығыраҡ бирешкән?



**М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты ғалимдары археологик асыш яһаған, ул агросәнәғәт комплексын, генетиканы һәм медицинаны үҫтереүҙә яңы этәргес булыуы ихтимал.**

"Ҡаҙморон археологик биҫтәһенең боронғо халҡын палеоантропологик һәм палеогенетик тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә мөһим асыш яһалды, ул - Волга буйы зонаһы өсөн тәүгеһе, - тип билдәләне БДПУ-ның гуманитар тикшереү алымдары һәм методология лабораторияһының ғилми хеҙмәткәре Николай Щербаков. - Боронғо ҡәбиләләрҙе өйрәнеү буйынса эштәр 15 йылдан ашыу дауам итте".

Ғалим әйтеүенсә, ошо асыштарҙың үҙенсәлеге - беҙҙең эраға тиклемге 16-19-сы быуаттарҙың ерләү һәм ҡәбилә комплекстарын өйрәнеүҙә. Ҡаҙыу эштәре үҙәк Башҡортостан биләмәһендә алып барылды. Генетика һәм палеогенетиканы үҙ эсенә алған сенсациялы һығымталар ырыу бәйләнештәрен, боронғо сирҙәрҙе, климаттың һәм ландшафттың үҙгәреүен билдәләүҙе күрһәтте. "Тикшереүҙәр һөҙөмтәһендә беҙ системалы ауырыуҙар кешеләр йәшәгән урын менән билдәләнә, тигән һығымтаға килдек. Шунан сығып, алдағы 50 йылда ошо төбәктә ниндәй сирҙәр барлыҡҡа килеүен фаразларға мөмкин. Палеоантропологик тикшеренеүҙәр барышында боронғо кешеләрҙең остеохондроз һәм коксартроз кеүек терәк-хәрәкәт аппараты сирҙәре асыҡланды. Был тәү ситатта йәшәү шарттарына бәйле. Әлеге төбәктә бөгөн дә ошондай сирҙәр осрай. Был мәғлүмәттәр кальций тоҙҙарының, мәҫәлән, ныҡ тоҙло һыу сығанаҡтарынан кеше организмына үтеп инеүен сикләү юлы менән ауырыуҙар проблемаһын хәл итергә мөмкинлек биреүе ихтимал, - тине Николай Щербаков. - Был тикшеренеүҙәр климаттың һәм боронғо ландшафттарҙың үҙгәреүен дә фаразларға ярҙам итергә тейеш. Элек ошо төбәктә үҫкән үҫемлектәр асыҡланды, шуның арҡаһында хәҙерге үҫемлектәр өсөн ниндәй тупраҡ уңышлы икәне тураһында һығымта яһарға була", - тип уртаҡлашты Николай Щербаков.

Тикшереүҙәр барышында алынған һөҙөмтәләр археологик биҫтә биләмәһендә климаттың йылыныу һәм һыуыныу режимын билдәләргә мөмкинлек бирҙе. Был агрокультураларҙы үҫтереүҙә һәм биҫтәнең сәсеү әйләнешен фаразлауҙа ярҙам итеүе ихтимал. БДПУ ғалимдары үткәргән тикшереүҙәр инглиздарҙа, американдарҙа һәм шведтарҙа ҡыҙыҡһыныу уятҡан.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Башҡорт-болғар концепцияһы

Башҡорт ғалимдары, алдараҡ әйтеүебеҙсә, болғар темаһын урап үтергә тырыша. Башҡорт халҡын формалаштырыуҙа ҡатнашҡан башҡорт ҡәбиләләре араһында болғарҙарҙың да булыуын беҙ бер нисек тә иғтибарһыҙ ҡалдыра алмайбыҙ. Болғар ҡәбиләләре башҡорт ҡәбиләләре менән тығыҙ аралашып көн иткән. Уларҙың бындай аралашыуы башҡорт нигеҙендәге башҡорт-болғарҙарҙы барлыҡҡа килтергән ( "Башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе, этник составы, урынлашыу тарихы", М., 1974, 399-сы бит). "Болғар" дәүләте төрки телле халыҡтарҙан, шул иҫәптән башҡорттарҙан торған. Татар ғалимы М.З. Зәкиев был халыҡтар болғарҙар араһында йотолғас, болғар этник тамырҙарын йөрөтә алмай, тип иҫәпләй. Болғарҙар менән башҡорттар бәйләнеше был этностар формалашҡанға тиклем үк булған. Мәҫәлән, болғарҙарҙы ла, башҡорттарҙы ла ҡыпсаҡтар тип атағандар. Хәҙер фәндә "башҡорт" һәм "болғар" этнонимдары тарихи яҡтан раҫланған. М. Зәкиев татарҙарҙы болғарҙарҙың вариҫтары тип һанай, әммә ул башҡорттар менән болғарҙарҙың мөнәсәбәте мәсьәләһенә бик һаҡ ҡарай.

Болғарҙар һәм башҡорттар төрлө заманда үҙенең дәүләтен төҙөгән, ҡайһы ваҡыт бер дәүләт эсендә лә көн иткән. IX-X быуаттарға ҡараған Иҙриси сығанаҡтарында "башҡорттарҙың йолалары болғар төркиҙәренеке кеүек. Улар төркиҙәр кеүек оҙон халат кейеп йөрөй..." тип әйтелә. Был халыҡтарҙы берләштереүсе элемент булып Тәңрегә табыныу торған. Әйле башҡорт ырыуы вәкиле Ҡол Ғәлиҙең XII-XIII быуаттарға ҡараған болғар эпитафияларында Тәңре һүҙе күп осрай.

Хәҙерге заманда йәшәүсе ғалим Х. И. Хаджилаев болғарҙарҙың ата-бабалары итеп өс төрки телле халыҡты атай: башҡорттар, татарҙар һәм сыуаштар. Болғарҙар һәм башҡорттар Болғар территорияһында көндәлек тормошта аралашып көн иткән. Болғарҙар башҡорттарҙан йәнлек тиреләре һатып алып, уларҙы көнсығыш илдәргә оҙатҡан, алмашҡа башҡорттарға иген, ҡорал, туҡымалар, биҙәүес әйберҙәр тәҡдим иткән. С. А. Плетнева раҫлауынса, ижтимағи мөнәсәбәттәр буйынса башҡорттар болғарҙарҙан, хазарҙарҙан һәм төрөктәрҙән һис тә ҡалышмаған. Башҡорттарҙың мәҙәниәте юғары кимәлдә үҫешеүенең, ныҡлы тормош көтеүенең һәм ҡеүәтенең сәбәбен автор был халыҡтың ныҡлы иҡтисад базаһы булыуында, иртә ултыраҡ тормошҡа күсеүендә күрә. IX-XII быуаттарҙа башҡорттарҙың күпләп ултыраҡ тормошҡа күсеүенең дәлиле итеп күп һандағы ҡалаларҙы һәм ҡәлғәләрҙе килтерергә була.

Көнбайышта башҡорттар менән болғарҙарҙы бер халыҡ итеп танығандар. Башҡорттар болғарҙар менән берлектә монгол-татар баҫҡынсыларына ҡаршы хәл иткес яуға сыҡҡан. Монгол осорона тиклемге иртә урта быуатта башҡорт хандары биләмәләрендә төньяҡ-көнбайыш менән көнсығыш араһындағы сауҙа юлы үткән. Күршеләре болғарҙар һәм хазарҙар менән башҡорттар Иртыш һәм Иҙел йылғалары араһында хакимлыҡ иткән.

**(Дауамы бар).**

# БАШҠОРТ

## зәңгәр күҙлеләр ҙә,

**Башҡорт, тигәндә, күҙ алдығыҙға ниндәй ҡиәфәттәге кеше баҫа, тип һораным төрлө милләттән булған дуҫтарымдан. Яуап төрлөсә булды, ләкин дөйөм һыҙат тип башҡорттарҙың ҡара сәсле, ҡуңыр йөҙлө, ҡыҫыҡ күҙле булыуҙарын, күберәген монголоидик расаға ҡарауҙарын билдәләнеләр. Уларға яуап формаһында аҡ йөҙлө, зәңгәр йәки йәшел күҙле, һары сәсле, ерән башҡорттар ҡатнашҡан "Light Bashkorts" исемле фотопроекттың интернет селтәрендәге һылтанмаһын ебәрҙем. Улар һүрәтләгән йөҙ-һыҙаттан ҡырҡа айырылып торған ҡиәфәтле кешеләрҙе күргәс, "Былар, ысынлап та, башҡорттармы?" тип һораны күптәр. Халҡыбыҙҙың ошондай вәкилдәренә иғтибарҙы йәлеп итеү ниәте ҡайҙан килеп сыҡҡанлығы, проекттың ниндәй һөҙөмтәләр биреүе хаҡында уның авторҙарының береһе Роберт ДӘҮЛӘТШИН һәм башҡорт халҡын өйрәнеүҙә, уның генофондын асыҡлауға ҙур өлөш индереүсе, "Башҡорт ырыуҙары тарихы" күптомлығы серияһы авторҙарының береһе, БР Социаль-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшереүҙәр институтының социаль культурология һәм антропология үҙәге етәксеһе Юлдаш ЙОСОПОВ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

**Был проектты башлауға нимә этәрҙе? Башҡорттарҙың йөҙ-ҡиәфәтенә ҡарата булдырылған дөйөм ҡараштың нигеҙе нимәлә тип уйлайһығыҙ?**

**Роберт Дәүләтшин:** Үҙем Баймаҡ районы Бөрйән ырыуы башҡортомын. Сибайҙа уҡыған саҡта минең аҡ йөҙлө, зәңгәр күҙле булыуым күптәрҙе аптырауға һалыр ине. Хатта мине башҡа милләт вәкиле итеп ҡараусылар ҙа булды. Республиканан ситтә лә башҡорт булыуыма шикләнеп ҡараусылар йыш осраны, сөнки күптәрҙең, бигерәк тә сит төбәктә йәшәүселәрҙең, күңеленә беҙҙең милләт тураһында тик ҡара сәсле, ҡыҫығыраҡ ҡара йәки һоро күҙле тигән тулыһынса дөрөҫләккә тап килмәгән стереотип һеңгән. Ләкин беҙҙең арала ҙур йәшел йәки зәңгәр күҙле, һары һәм хатта ерән сәсле кешеләр күп. Ошо стереотипты емереү маҡсатында әлеге проектты уйлап сығарып, тормошҡа ашырҙыҡ.

**Юлдаш Йосопов:** Теге йәки был халыҡ тураһындағы стереотиптың барлыҡҡа килеүенә һәм йәмғиәттең хәтерендә ныҡыныуына мәҙәни мөхит көслө тәьҫир итә. Яҙыусылар үҙҙәренең китаптарында, режиссерҙар - фильмдарында, рәссамдар - картиналарында милләттең тышҡы йөҙ-ҡиәфәтен ниндәй сүрәттә күрһәтеүенән сығып, халыҡ тураһында фекер төйнәлә. Башҡорттарҙың ҡара ҡыҫыҡ күҙле, ҡара сәсле милләт тигән стереотип 19-сы быуатта крайҙы өйрәнеүселәрҙең һәм сәнғәт әһелдәренең эштәренә ҡарап һалынған. Мәҫәлән, шул осор крайҙы өйрәнеүселәре һәм тарихсылары күберәк Ырымбур яҡтары буйлап сәйәхәт иткән һәм, билдәле, шул биләмәлә йәшәүселәрҙең тормош-көнкүрешен, йөҙ-ҡиәфәтен күргән һәм өйрәнгән. Әлбиттә, Башҡортостандың төньяғы буйлап сәйәхәт итеүселәр һәм күргәндәрен яҙып ҡалдырыусылар булған, ләкин уларҙың әҙ генә һандағы яҙмалары киң таралмаған. Ә 20-се быуат профессиональ яҙыусылары һәм башҡа өлкәләге ижад кешеләре ошо стереотипты үҫтереп, үҙ эштәре ярҙамында нығытып ҡуйҙы.

**Роберт Дәүләтшин:** Башҡорттар элек шулай булған, ә бөгөн былай, тип әйтеп булмай. Һәр заманда ла, бөтә быуатта ла төрлө ҡиәфәтле, буйһылы башҡорттар йәшәгән һәм әле лә шулай. Алдағы быуаттарҙа башҡорттоң образын формалаштырыуҙа аныҡ ҡына миҫалдар ҙа бар. Шуларҙың береһе, минеңсә, Ф. Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт академия бейеү ансамбле, тип әйтер инем. Уның составына ҡара ҡашлы һәм күҙле, ҡара сәсле, йәғни бер типтағы ҡыҙҙар һәм егеттәрҙе алғандар. Улар Рәсәй төбәктәрендә, сит илдәрҙә күпләп сығыш яһай башлағас, ундағы халыҡ милләтебеҙҙе алдарында баҫып торған ижадсыларҙан сығып һынландырған. Шулай уҡ әлеге ансамбль бейеүселәренә ҡарап, үҙебеҙҙәге башҡа хеҙмәт өлкәһендә лә, бигерәк тә радио һәм телевидение, филармония һәм театрҙарҙа, нәҡ ошондай типаж башҡорттар эшләй башлаған. Ә башҡа төрлө төҫ-ҡиәфәтле башҡорттар ситләтелгән, иғтибарҙан ситтә ҡалған. Ошо образдың күпләп күҙ алдында булыуы беҙҙең һәм башҡа милләттәрҙең аңына "башҡорттар ошолай була", тигән стереотипты һеңдергән.

**Был проект ниmәһе менән әһәмиәтле?**

**Юлдаш Йосопов:** Егеттәрҙең был проектын беҙ милләтебеҙгә юғалырға бирмәгән, уны артабан да йәшәтеү мөмкинлеге биргән проект-конструкторҙар рәтенә ҡуйырға була. 20-се быуатта милләттең юғалып ҡалмау ысулы булып милли парадигма торҙо. Әлеге ваҡыттың глобаль тенденциялары ла беҙҙең милләтебеҙгә яңы һорауҙар, талаптар һәм бурыстар ҡуя. Ул шул уҡ күп мәғлүмәтте үҙ эсенә туплаған һәм таратҡан интернет селтәре менән дә бәйле. Ошо мәғлүмәти арауыҡ араһында беҙ ҙә үҙебеҙҙең мөйөшөбөҙҙө, урыныбыҙҙы табырға тейешбеҙ. Унда кем ул башҡорт, хәҙерге заман башҡорто ниндәй икәнлеген күрһәтеүсе мәғлүмәт булырға тейеш. Үткән быуаттың урталарында формалашҡан башҡорт образы яңы мәғлүмәти бушлыҡты тултырыу өсөн тура килмәй. Беҙгә үҙгәрештәр кәрәк. Беҙҙең образыбыҙға. Беҙҙең үҙаңыбыҙға. Ошоларҙы тормошҡа ашырыуҙа әлеге проект та мөһим роль уйнай. Уның әһәмиәте беҙгә ҡағылышлы ҡалыплашҡан стереотиптарҙы үҙгәртеүгә, ә бәлки, бөтөнләй яңынан формалаштырыуға ҡайтып ҡала. Этноталаптар бүтән бөгөнгө заманда. Һәм һәр бер халыҡ үҙенә ҡағылышлы мәғлүмәти майҙанды - антропологик йәһәттән дә, тел өлкәһендә лә, башҡа даирәлә лә -киңәйтергә тейеш.



***Хәҙер глобализация, космополитизм, мультикультурализм көслө. Беҙгә ошо тенденциялар араһында юғалып ҡалмаҫҡа тырышыу мөһим. Кем ул беҙ - бөгөнгө башҡорттар? Элекке образдар бөгөнгө көн талаптарына тура килмәй һәм донъя ла беҙҙе элекке форматта ҡабул итмәй. Бөтә тармаҡта ла яңы ҡараш булырға тейеш. Ә яҙыусы, рәссам, дизайнерҙар, коммерция мөхите, ғилми берләшмәләр, ғөмүмән, барыһы ла халыҡтың үҙгәрештәрҙе ҡабул итеүенә үҙ өлөшөн индереүе мөһим. Шулай уҡ беҙҙең алда торған тәүмаҡсаттарҙың береһе - төбәкте рекламалау, йәғни республиканың брендын булдырыу.***

**Роберт Дәүләтшин:** Республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарында күк, йәшел, зәңгәр күҙле, һары һәм ерән сәсле, һипкелгә "бай" башҡорттар күп йәшәй. Ләкин улар үҙҙәрен башҡорт булараҡ танымай, беҙ ҙә башҡорттар рәтенә индермәйбеҙ. Тик уларҙың тамыры башҡорт, ата-бабалары беҙҙең милләттән. Ваҡытында ситләтелгән башҡорттарҙы яйлап туғандаш халыҡ "йота" башлай. Ә ул ситләтеүҙең бер сәбәбе булып йөҙ-ҡиәфәттәренең беҙҙең аңыбыҙҙағы өлгөгә тап килмәүе тора ла инде. Беҙгә ошо яңылышлыҡты төҙәтергә, уларҙың тарихи милләте рәтенә ҡайтыуҙарына булышлыҡ итергә кәрәк. Үҙ диалектында һөйләшкән, әммә "Мин башҡорт" тип алдыбыҙға килеп торған, мәҫәлән, ерән сәсле, йәшел күҙле кешене уның теленә ҡарап ҡына фекер йөрөтөп, ситкә тибергә ярамай. Шуға күрә беҙҙең проект үҙ эшмәкәрлеген ошо йүнәлештә лә алып барҙы һәм халыҡ тарафынан ҙур теләктәшлек тапты. Нәҡ ошо төбәктә йәшәүсе милләттәштәребеҙ әүҙемлек күрһәтте. Уларҙың күбеһе беҙҙең проекттан һуң тамырҙарын барлап, ата-бабаларының башҡорт булыуын асыҡланы. Дөйөмләштереп әйткәндә, проектта 700-ҙән ашыу кеше ҡатнашты.

**Юлдаш Йосопов:** Бөгөнгө көндә тел теге йәки был милләтте билдәләүсе күрһәткес түгел. Дөрөҫөрәге, телдең функцияһы үҙгәрҙе. Шуға күрә диалектик яҡтан икенсе төрлө һөйләшкән башҡорттарҙы үҙебеҙҙекеләр итеп күрергә өйрәнергә кәрәк. Шулай уҡ әлеге проектта ҡатнашҡан, йәғни асыҡ йөҙлө башҡорттар тип әйтәйек, ошо уҡ трендта тора. Хәҙер глобализация, космополитизм, мультикультурализм көслө. Беҙгә ошо тенденциялар араһында юғалып ҡалмаҫҡа тырышыу мөһим. Кем ул беҙ - бөгөнгө башҡорттар? Элекке образдар бөгөнгө көн талаптарына тура килмәй һәм донъя ла беҙҙе элекке форматта ҡабул итмәй. Бөтә тармаҡта ла яңы ҡараш булырға тейеш. Ә яҙыусы, рәссам, дизайнерҙар, коммерция мөхите, ғилми берләшмәләр, ғөмүмән, барыһы ла халыҡтың үҙгәрештәрҙе ҡабул итеүенә үҙ өлөшөн индереүе мөһим. Шулай уҡ беҙҙең алда торған тәүмаҡсаттарҙың береһе - төбәкте рекламалау, йәғни республиканың брендын булдырыу. Ә бының өсөн урындағы милләткә йәки унда йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә генә түгел, ә тотош төбәккә ҡарата яңы ҡараш булдырыу кәрәк. Егеттәрҙең был проектын ошо йәһәттән башҡарылыусы эштәрҙең береһе, тип һанайым.

**Роберт Дәүләтшин:** Халыҡ һанын арттырыуҙы тик бала табыуға, уларҙың һанын ишәйтеүгә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ түгел. Бында үҙҙәрен "юғалтҡан", әлегә тиклем икенсе милләт вәкиле тип һанаған, әммә тамырҙары менән башҡорт булғандарҙы ҡайтарыу өҫтөндә лә әүҙем эшләргә кәрәк. Шуға күрә проекттың маҡсаты һәм әһәмиәте - фотоһүрәттәр күргәҙмәһе ойоштороу ғына түгел, ә халыҡыбыҙға икенсе күҙлектән сығып ҡарауға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. Беҙҙең проекттың лозунгы - "Башҡортлоҡ - күңел торошо".

**Юлдаш Йосопов:** Был проекттың әһәмиәте Башҡортостанда йәшәгән башҡа милләттәр өсөн дә ҙур. Башҡортлоҡ - бөтә донъя мәҙәниәте байлығы. Әгәр ҙә кеше икенсе телдә аралаша, йөҙө лә беҙ өйрәнгән башҡорт тибина оҡшамаһа һәм хатта ул икенсе милләт вәкиле булһа ла, ни өсөн башҡорт булмаҫҡа мөмкин? Беҙҙең республика - Башҡортостан. Тышҡы ҡиәфәтең, аралашҡан телең ниндәй булыуы түгел, ә күңел торошо, үҙеңде кем итеп тойоуың мөһим.

**Роберт Дәүләтшин:** Әйткәндәй, проектта милләте башҡорт булмаһа ла, үҙен башҡорт итеп тойоусы ҡатнашыусылар ҙа булды шул. Әлегә тиклем ҡиәфәтенең һалынған стереотипҡа тура килмәүе һөҙөмтәһендә үҙен башҡорт тип танытмаған кешеләр ҙә әүҙемлек күрһәтте. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ, проектҡа фотоларҙы зәңгәр күҙле, һары сәселәр үҙҙәре түгел, ә уларҙың ҡара ҡашлы, күҙле һәм сәсле ағай-апайҙары күп ебәрҙе.

**Башҡорт ырыуҙары араһындағы ошондай антропологик һәм башҡа төрлө айырмалыҡтар ниндәй дәүмәлдә?**

**Юлдаш Йосопов:** Башҡорт ырыуҙары араһында, билдәле, ҡушылыуҙар бар, ләкин улар араһындағы айырма ла күп. Кешенең ниндәй ырыуға ҡарағанын шул уҡ йөҙ-ҡиәфәткә лә ҡарап, әҙме-күпме айырырға мөмкин. Ниндәй ырыуға ҡарау социаль тормошта әллә ни ҙур роль уйнамаһа ла, аныҡ кешене идентификациялаусы булараҡ әһәмиәтле. Башҡорттарҙа бер-береһенән айырылып торған дүрт этнографик төркөм бар: төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнбайыш һәм көньяҡ-көнсығыш. Антропологик

**✓ Ысынлап та, һәр осорҙа ла башҡорттар яңы дәүләтселек системаһында үҙҙәренең урынын табырға мөмкинлек биргән һәм, иң мөһиме, унда тиң хоҡуҡлы булыуҙы тәьмин иткән юлдарҙы таба белгән.**



яҡтан ҡарағанда ҡатын-ҡыҙҙарҙа беҙҙең эраның 4 меңйыллығына тиклем йәшәгән финугыр халыҡтарына хас булған, йәғни асыҡ йөҙ, зәңгәр, йәшел күҙ, һары сәс кеүек билдәләр һаҡланған. Ә ир-егеттәрҙә иһә, шул уҡ антропологик йәһәттән һүҙ йөрөткәндә, Көньяҡ Себер, Үҙәк Азия, Кавказ халҡы гендары ныҡ сағылған.

Милләттең барлыҡҡа килеү тарихын реконструкциялау өсөн, тәү сиратта, уның Y хромосомына, йәғни мәғлүмәтте иң күп һаҡлаусы сығанаҡҡа, иғтибар итергә кәрәк. Ә ул тик ир-егеттәрҙә генә була. Митохондриаль, йәғни ҡатын-ҡыҙҙың ДНК-һы, бындай үҙенсәлеккә эйә түгел. 19-сы быуаттағы төбәкте өйрәнеүселәр яҙып ҡалдырыуынса, үҫәргән ырыуы башҡорттары үҙҙәрен иң яҡшылары тип һанаған. Уларҙың араһында, әлеге проекттың барлыҡ ҡатнашыусыларын ни рәүешле килеп сығыуын аңлатып булмай. Ғөмүмән алғанда, юрматыларҙы бер кем менән дә ҡушылмаған, ситтән күсеп килеүселәрҙе үҙҙәренә индермәйенсә, йомолоп ҡалған айырым халыҡ тип ҡарарға була. Ә бына Стәрлебаш районында йәшәүселәрҙә бындай "таҙалыҡ" юҡ, уларға ҡайҙандыр килеп ҡушылыусылар күп булған. Тамъян ырыуына, киреһенсә, ҡушылырға теләүселәр күп булған. Ләкин гендары буйынса улар барыбер икенсе ырыу кешеләре булып ҡалған. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары башҡаларҙан ҡырҡа айырыла. Улар быуаттар дауамында арта торған, бүленеп сыға торған. Бөгөнгө көндә табындарҙың генын Татарстанда йәшәүселәрҙә, шулай уҡ мишәрҙәр араһында ла күп осратырға була. Көньяҡ ырыуҙарының һәр шәү мәсьәләһе килеп тыуғас, нәҡ башҡорттар барыһын да ҡәнәғәтләндергән республика формаһындағы ил булдырыу тураһында һүҙ башлай. Күреүебеҙсә, был тәҡдим дә хуплау тапҡан һәм әлегә тиклем актуаль.

**Юлдаш Йосопов:** Башҡорттар Алтын Урҙа осоронда ла, Нуғай Урҙаһы ваҡытында ла, Ҡаҙан ханлығы, Мәскәү бөйөк кенәзлеге, Рәсәй империяһы, Советтар Союзы, Рәсәй Федерацияһы, ғөмүмән, һәр ваҡыт халыҡ булараҡ юғалып ҡалмаҫлыҡ мөмкинлектәр тапҡан. Ә бит бөтә милләттәр ҙә ошо рәүешле үҙгәреш кисерә алмай. Мәҫәлән, мишәрҙәр. Улар, милли проект булдыра алмауҙары арҡаһында, татар һәм башҡорт милләтенә ҡушылып китеп, юғалып ҡалды. Ә башҡорттар быға нисек өлҙур, ә берҙәм, төрлө ҡиәфәтле булыуҙарына ҡарамай, бер үк милләт икәнлеген таныусы, белеүсе ҡәүем бер нәмәгә лә бирешмәйәсәк.

**Юлдаш Йосопов:** Егеттәрҙең ошондай проекттары менән бер рәттән, аҡыллы текстар кәрәк беҙгә, сөнки ташҡа баҫылған әйбер күп нәмәгә йоғонто яһай. Улар аңды формалаштыра, кешенең фекерен үҙгәртергә, ниндәйҙер аңлашылмаған әйбергә төшөнөргә булышлыҡ итә. Ошондай бер яҙманы хатта бер нисә генә кеше уҡыһа ла, ул - файҙаға. Шуға күрә башҡорттарҙа эпостар системаһы үҫешкән булған. Мөһим мәғлүмәттәрҙе үҙ эсенә һыйҙырған эпостарҙың, тарихи риүәйәттәрҙең халыҡта һаҡланып ҡала килеүенән милләттең йәшәйеше, һәр яңы дәүергә яраҡлаша алыуы өсөн

# ДОНЪЯҺЫНДА...

## ерән сәслеләр ҙә етерлек

ектта ҡатнашыусылар һымаҡ, күк йәки йәшел күҙле, асыҡ йөҙлө вәкилдәр күп булған. Бәлки, улар ошо ҡиәфәт үҙенсәлектәренән сығып, үҙҙәрен өҫтөнлөклө урынға ҡуйғандарҙыр ҙа. Ә, бәлки, башҡорттарҙың йөҙө ул ваҡытта күберәк ошо типҡа тура килгәндер. Бөгөнгө көндә Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында йәшәүселәр үҙҙәренең ниндәй милләткә ҡарауын аныҡ ҡына әйтә алмаһа ла, генетика улар өсөн яуап бирә ала. Мәҫәлән, үҫәргәндәр менән Яңауыл районында йәшәүсе уран, гәрәй, ҡырғыҙ һәм башҡа ырыуҙар генетик яҡтан ныҡ яҡындар. Шулай уҡ унда, антропологик яҡтан ҡарағанда, европеоид расалы ҡиәфәткә тура килгән халыҡ йәшәй.

Экспедициялар ваҡытында, гендарҙы билдәләү маҡсатында ҡан өлгөләрен йыйғанда ырыуҙар араһындағы айырмалыҡтарҙы күреп йөрөнөк. Күҙгә ташланған иң күптөрлөлөк - көньяҡта. Ул яҡтарҙағы һәр ырыуҙың үҙ генофонды бар. Был төбәктәрҙә йәшәгән башҡорттар бер-береһе менән әллә ни бәйләнешкә инмәгән, һәр береһе үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнаған мини-дәүләт булған, тип әйтергә мөмкин. Бигерәк тә юрматы ырыуына ҡарағандарҙың гендарында үҙгәрештәр, ҡушылмалар юҡ кимәлендә. Быны юрматыларҙың да үҙ рәттәренә ситтәрҙе алырға һәм башҡаларҙың да уларға ҡушылырға теләмәүе тип ҡарарға була. Был ырыуҙың ир-егеттәре генофонды үҙенә башҡа һәм башҡа ырыуҙарҙыҡынан ныҡ айырыла. Ҡыпсаҡтарҙың күбеһенә хас булған P1A гены юрматыларҙа ла осрай, ләкин ул бөтөнләй башҡаса. Ул гендың ҡайҙан, береһенең генофонды айырым. Ул яҡтарҙа йәшәгән ырыуҙарҙың ир-егеттәре икенсе ырыуҙарҙан кәләш алғандар, тик үҙҙәре ситкә китмәгән. Мәҫәлән, бөрйән ырыуында әлеге ваҡытта ла 100 процент P1B гены һаҡланған.

**▸ Һәр заманда ла милләттәр алдына ҡуйған талаптар, шарттарҙы йырып сығып, башҡорттар ниндәй генә системала ла үҙ урынын табып, халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалған. Быное өсөн улар төрлө юлдар эҙләп тапҡан. Милләтебеҙҙең артабанғы үҫешендә, һаҡланып ҡалыуында ошо проекттың урынын нисек баһалайһығыҙ?**

**Роберт Дәүләтшин:** Ысынлап та, һәр осорҙа ла башҡорттар яңы дәүләтселек системаһында үҙҙәренең урынын табырға мөмкинлек биргән һәм, иң мөһиме, унда тиң хоҡуҡлы булыуҙы тәьмин иткән юлдарҙы таба белгән. Мәҫәлән, Зәки Вәлиди һәм уның иптәштәре үҙ ваҡытында автономия системаһын булдырыуҙы тәҡдим иткән. Һәм уларҙың тәҡдиме ҡабул ителгән. Ә уҙған быуатта, СССР тарҡалып, илдең артабан ниндәй юлдан барыуы, ниндәй сәйәси системала йәгәшкән? Беҙгә ошо һорауға яуап табырға кәрәк. Ә бының өсөн, алда әйтелгәнсә, башҡорттарға ҡағылышлы ҡалыплашҡан стереотиптарҙы боҙоу мөһим. Әле беҙ яңы мәғлүмәти дәүерҙә йәшәйбеҙ. Күп нәмә аңлашылып етмәй, шулай ҙа милләт булараҡ артабан да һаҡланып ҡалыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге күҙаллана башланы. Тәү сиратта, үҙ асылыбыҙҙы, шул иҫәптән тышҡы йөҙ-ҡиәфәтебеҙгә ҡағылышлы булғандарын да, төшөнөргә кәрәк. Ошондай оло бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа әлеге проекттың да



***Халыҡ һанын арттырыуҙы тик бала табыуға, уларҙың һанын ишәйтеүгә генә ҡайтарып ҡалдырыу дөрөҫ түгел. Бында үҙҙәрен "юғалтҡан", әлегә тиклем икенсе милләт вәкиле тип һанаған, әммә тамырҙары менән башҡорт булғандарҙы ҡайтарыу өҫтөндә лә әүҙем эшләргә кәрәк. Шуға күрә проекттың маҡсаты һәм әһәмиәте - фотоһүрәттәр күргәҙмәһе ойоштороу ғына түгел, ә халҡыбыҙға икенсе күҙлектән сығып ҡарауға ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. Беҙҙең проекттың лозунгы - "Башҡортлоҡ - күңел торошо".***

тотҡан урыны ҙур, сөнки Light Bashkorts беҙгә, башҡорттарға, ҙурыраҡ контекста ҡарарға мөмкинлек бирә.

**Роберт Дәүләтшин:** Проектты башлаған мәлдә "Ни өсөн был проект кәрәк?", "Беҙҙең халыҡ өсөн нимә бирә?" һәм башҡа ошондай һорауҙар күп яңғыраны. Былай ҙа бүлгеләнеп бөткәнбеҙ, ә һеҙ ошоно тағы ла киңәйтергә тырышаһығыҙ, тип ғәйеп ташлаусылар ҙа булды. Ләкин уларға беҙҙең маҡсат тап киреһе, йәғни төрлө антропологик ҡиәфәтле башҡорттарҙы берләштереү һәм милләттебеҙҙең артабан да һаҡланып ҡалыуына булышлыҡ итеү икәнлеген аңлата алдыҡ, тип ышанам. Тырымтырағай халыҡтың әлеге замандың ҡатмарлы шарттарында юғалып ҡалыу хәүефе ҙур мәғәнәгә эйә булған. Һәм был бөгөнгө көндә лә үҙ актуаллеген юғалтмаған, сөнки бер яҡтан ҡарағанда, эпостарҙың әлеге тормошобоҙҙа кәрәге юҡ кеүек, ләкин нәҡ улар беҙгә артабан алға барырға ярҙам итеүсе нигеҙ булып тора.

**Роберт Дәүләтшин:** Беҙ ошо проектты киңәйтеп, "Башҡорт ырыуҙары" китаптарына таянып, төрлө ырыу вәкилдәре менән "WEST-BASHKIR" исеме аҫтында фотосессия уҙғарырға ниәтләйбеҙ. Унда беҙ әлеге форматты киңәйтеп, төрлө ырыуға ҡараған әүҙем, билдәле замандаштырыбыҙҙы ғаиләләре менән бергә төшөрөп, уларҙың эшмәкәрлеге, шөғөлдәре хаҡында яҙып, шәжәрәләрен дә күрһәтергә итәбеҙ. Элек төшөрөлгән фотоларҙы ҡарайым да, ундағы кешеләр тураһында күберәк белгем килә, ә мөмкинлек юҡ. Шуға күрә, тулы һәм фотоһүрәтле мәғлүмәт киләсәк быуындар өсөн файҙалы буласаҡ, тип уйлайым. Ә бөгөнгө заман йәштәре ошондай арҙаҡлы кешеләр миҫалында уңышҡа ынтыласаҡ. Был идеябыҙҙы тормошҡа ашырып, проектты республикала ғына түгел, ә Рәсәй, бөтөн донъя кимәленә сығарырға ине, Алла бирһә.

**▸ Әңгәмәбеҙҙе ниндәй фекерҙәр менән йомғаҡлап ҡуйыр инегеҙ?**

**Юлдаш Йосопов:** Беҙгә башҡорт донъяһының киңерәк төшөнсә булыуын аңларға, башҡорт халҡын тик ырыуҙар рәүешендә генә ҡабул итеүҙән тайпылырға кәрәк. Әлбиттә, ырыуҙар беҙҙең өсөн мөһим, ләкин башҡа системалар тураһында ла онотороға ярамай. Милләтебеҙгә ҡарата киләсәкте күҙ алдына аныҡ баҫтырыусы ниндәйҙер стратегик ҡараш булырға тейеш беҙҙә. Үҙебеҙҙең артабанғы үҫешебеҙгә ҡағылышлы "Башҡорт халҡының киләсәге" исемле план төҙөү мөһим. Әлеге ваҡытта ул юҡ. Бөгөнгө көндә, мәҫәлән, Әбйәлил һәм Краснокама районы халыҡтарына бүленгән иғтибар араһында айырма ҙур. Был дөрөҫ түгел, сөнки уларҙың икеһендә лә башҡорттар йәшәй һәм милләт тураһында уйлағанда, ошоно онотороға ярамай.

**Роберт Дәүләтшин:** Беҙҙең көньяҡ-көнсығыш яҡтары башҡорттары төньяҡ-көнбайышта йәшәүсе милләттәштәребеҙҙе "ситләтә". Проектты эшләгәндә лә ошо мәсьәлә ныҡ күҙгә ташланды. Был дөрөҫ түгел. Ике урталыҡта тороп ҡалған башҡорттарыбыҙға ҡул һуҙырға, уларға табан аҙым эшләргә кәрәк. Беҙҙеке кеүек йәки башҡа проекттарҙа ҡатнашырға теләк белдерһәләр, уларҙы дәртләндерергә, ярҙамлашырға тейешбеҙ. Эйе, улар беҙ күнеккән телдә һөйләшмәй. Эйе, бәлки, ҡапыл ғына бер-беребеҙҙе күп йәһәттән аңлап та етмәҫбеҙ. Ләкин беҙ бер милләт икәнебеҙҙе аңлап эш итергә тейешбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында Роберт: "Проектты башлағанда беҙҙе тәнҡит утына тотоусы, милләтселектә ғәйепләргә тырышыусылар ҙа табылды. Һәм иң ҡыҙғанысы, ул һүҙҙәрҙе үҙебеҙҙең башҡорттар ауыҙынан ишетеү ине. Шулай ҙа эшебеҙҙе ыңғай яҡтан баһалап, беҙҙе дәртләндереп, проекттың әһәмиәтен күтәргәндәр, барыбер, күберәк булды", тигәйне. Һәр яңы башланғыстың ниндәйҙер ҡаршылыҡтарға осрауы ғәҙәти хәл, ләкин уларҙы маҡсатыңа барыуҙа кәртә итеп күрмәү шарт. "Light Bashkorts" проект авторҙарының ошоно аңлап, үҙ ниәттәренән баш тартмайынса, уны аҙағынаса еткереүҙәре хуплауға лайыҡ. Уларға барлыҡ ниәттәренең дә тормошҡа ашыуын теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

*✓ Армияға бармаһаң, ҡыҙҙар яратмаҫ, тигән уй әллә ҡайҙан килеп күңелгә оялаған был дәүерҙә, ысынлап та, гүзәлдәребеҙҙең һалдатта булған егеттәрҙе айырыуса ихтирам итеүе һиҙелә торғайны.*



ӘРМЕ ЯҘМАЛАРЫ

# ҺАЛДАТ ЙЫРЫ,

## йәки Ил һаҡлаусыларыбыҙға мөнәсәбәтебеҙ хаҡында һүҙ

### Ҡыҙҙар көтөп ала ине…

Әрме хеҙмәте хаҡында шул мәлдәрҙә сыҡҡан йырҙарҙы бала саҡтан уҡ яратып йырлап үҫтек. Йәштәргә лә, ололарға ла оҡшай ине һалдат йырҙары.

*...Мин алыҫта илде һаҡлап*
*Поста торам, алтыным.*
*Һалдатыңды онотма һин*
*Мин онотмам, яҡыным...* - тип әллә күпме һалдат үҙенең һөйгән ҡыҙына хат яҙғандыр. Элек һыу ҙа еүешерәк, шәкәр ҙә татлыраҡ була торғайны, тигәндәй, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа һалдатты көтә белде. Егетен көтөргә вәғәҙә иткән ҡыҙҙарҙың һүҙендә тормағандары булһа ла бик һирәк кенә булғандыр. Уларҙы һалдат хеҙмәтенән көтөп алған Раушаниялар хәҙер инде өләсәйҙәр булып, ҡасандыр ҡартының яҙған хаттарын иҫкә генә алаларҙыр.

Армияға бармаһаң, ҡыҙҙар яратмаҫ, тигән уй әллә ҡайҙан килеп күңелгә оялаған был дәүерҙә, ысынлап та, гүзәлдәребеҙҙең һалдатта булған егеттәрҙе айырыуса ихтирам итеүе һиҙелә торғайны. Үҙҙәре белгән иң-иң яғымлы һүҙҙәр ярҙамында матур почерк менән хаттар яҙып, хеҙмәттәге егеттәрҙең күңелдәрен йылытып, уларҙың ауыр хеҙмәтен бер аҙ ғына булһа ла еңеләйтергә сәбәп булып торғандыр ҡыҙҙарыбыҙ. Яратҡан әсәһенән хат көткән һымаҡ уҡ, һөйгән ҡыҙынан да көн дә ҡош телендәй генә булһа ла хәбәр көтә ине һалдат. Хәҙерге һымаҡ һәр кемдә булған телефон тигән нәмә хаҡында ул саҡта хатта хыялланманыҡ та. Шунлыҡтан, хаттар ифрат та һағындырап килә ине.

### Бабайлыҡ булғанмы?

Әллә ҡасан уҡ тарих төпкөлөндә ҡалған боронғо ваҡыттармы ул, һуңғараҡ булған осорҙар булһынмы, шәхсән, минең үҙемдә һәммә дәүерҙәге әрме хеҙмәтенә ҡарата сирҡаныу хисе бер ваҡытта ла уянманы. Барыбер үҙемдең киләсәгемде хәрби хеҙмәттән тыш күҙ алдына килтерә алманым. Илде һаҡлау бик боронғо замандарҙан алып, иң мөһим нәмәләрҙән һаналғанлығын бала сағымдан уҡ аңлай инем. Урыҫтар әйтмешләй, йәш саҡтағы "романтика" тип аталған бер мәлем булғандыр инде. Хатта әлеге батша әрмеһенә лә һис шикһеҙ үҙ иркем менән китер инем, тигән инаныуҙа булдым. Хәҙерге күҙлектән сығып ҡарағанда, был, ысынлап та бик сәйер шул. Тап бына шундай рухта тәрбиәләнеп үҫеүем әкренләп үҙебеҙҙең Совет Армияһына ихтирам һәм һөйөүгә алып килгәндер, унан, ваҡыты еткәс, үҙемдең дә хәрби кеше булып китеүемә сәбәп булғандыр, күрәһең. Коммунистик тормош төҙөүселәр заманында илдә балаларға һәм йәштәргә патриотик тәрбиә биреү ифрат та юғары кимәлдә булды шул. Хәҙер йыш ҡына телгә алған "дедовщина" тигән нәмә хаҡында ул саҡта бер ҙә ишеткәнебеҙ булманы. Хеҙмәт итеп ҡайтҡан ағайҙар һис ваҡытта ла был турала һөйләмәнеләр, гәзиттәрҙә лә был хаҡта яҙманылар. Бәлки, бындай күренеш элек бөтөнләйгә булмағандыр, тип хәҙер ана шул мәлдәрҙә һалдат булып йөрөгән бәғзе ағайҙарҙан һораштырғылайым. Ул саҡтарҙа ла, хеҙмәт итә башлаған осорҙа һәммәһе "бабайлыҡ" тигән нәмәне бер аҙ татыған булған икән, тик, демобилизация яҡынлашҡан һайын әкренләп онотола барып, ҡайтыр мәлдә бөтөнләйгә "хәтерҙән сығып" киткәнлеген аңланым. "Йәштәрҙе "дед" өйрәтмәһә - кем өйрәтһен", тип кенә яуап ҡайтара күпселек. Ә кемделер айырыуса ныҡ ҡыйырһытыу, хатта уның һаулығына зыян килтереүгә тиклем барып еткереүсе енәйәтселәр һәр йәмғиәттә лә була килгәндер инде. Өйҙәрендә үк шулай тәрбиәләнгән, енәйәт ҡылырға әҙер хулигандар әлегәсә әрме коллективына килеп эләккеләүе - тәбиғи. Енәйәтсене әрме тыуҙырмай бит, тигәйне бер ағай. Әрмене бына ошо ифрат та насар яғы хаҡында беҙ, малайҙар, ысынлап та, хәбәрҙар түгел инек. Был хаҡта ишеткән хәлдә лә һис ышанмаҫ инек, моғайын. Буласаҡ хәрби хеҙмәтебеҙҙең ваҡыты етеүен ҙур түҙемһеҙлек менән көткән, "әрмегә ғашиҡ булған", тип әйтерлек малайҙар инек бит инде беҙ... Ә бына һуғыш мәлендә һәм унан һуңғы бер нисә йыл тирәһе, йәш һалдатты өлкәндәр тарафынан ҡыйырһытыу тигән нәмә, ысынлап та бөтөнләйгә булмаған, тиҙәр...

### Афғанды ла күрҙек беҙ…

Әрме сафына килеп, уның әсе-сөсөһөн үҙ иңемдә татый башлағас та уға ҡарата һөйөүем кәмемәне. Хәрби хеҙмәт - һәр ир-ат затының бурысы, тигән инаныу бер ваҡытта ла үҙемде ташлап китмәне, һәм, ниндәй генә ауыр саҡтар булмаһын, ошо юлды һайлағаныма үкенмәнем. Әммә, нисек кенә "күктәргә сөйөп" маҡтаһаң да, әрмебеҙ беҙгә гел генә яҡты йөҙөн күрһәтеп тормаған шул. Берсә кинәт кенә икенсе яҡҡа әйләнеп, артҡы тояҡтары менән "башҡа эләктергән", йә иһә йән фарман алып ҡасҡан өйрәнсек тай һымаҡ, унда-бында ташлағылаған осорҙары ҙа булманы түгел. Етмеш туғыҙынсы йылдың көҙөндә хөкүмәтебеҙ үҙенең "ҡәҙерле ҡолдарын" һәр тау тишегенән яуған ут ямғырына - Афғанға ҡыуғанда ла быны беҙ "демократик бурысты үтәү"гә һананыҡ. Ил фарман бирһә - унда ла китергә әҙер инем, әммә, бәхеткә, мин хеҙмәт иткән ғәскәрҙәр төрөн "секретный", тип унда алманылар. Ун меңдән ашыу һалдат һәм офицер ғүмерен өҙгән был һуғыштың һис кенә лә беҙҙең "бурыс" булмағанлығына һуңынан ғына төшөндөк. Әммә ҡыйылған йәш ғүмерҙәрҙе ҡабаттан ҡайтарып булмай. Куйбышев хәрби медицина факультетында бер осорҙарҙа уҡыған танышым, Учалы районы Ахун ауылы егете - медицина лейтенанты Илһам Вәлишин Баймаҡ районы Аҡтау ауылынан дуҫым кесе сержант Ғабдрахман Йәрмөхәмәтов һәм башҡа бик күптәрҙең цинк табуттарында илгә ҡайтыуҙары онотторлоҡ түгел шул...



### Үҙгәртеп ҡороу елдәре

Һикһәненсе йылдар аҙағында бөтә СССР-ҙың аҫтын-өҫкә әйләндергән үҙгәртеп ҡороу заманында кешеләрҙең, хөкүмәтебеҙҙең әрмебеҙгә һәм хәрби хеҙмәткәрҙәргә булған ҡарашы кинәт (бер нисә ай эсендә!) һыуынғанын да тойҙоҡ. Гәзит-журналдар, теле-радиотапшырыуҙар, ғөмүмән, барлыҡ киң мәғлүмәт саралары ил һаҡсыларына ҡаршы "һөжүмгә" күсте. Һәр йәмғиәттә була торған (әрме лә был тарафтан ташлама түгел) ниндәйҙер булһа аныҡ бер насар кеше миҫалында, бөтә Совет Армияһын "утлы табала" ҡыҙҙырыуҙары ныҡ ҡына һиҙелә ине. Үҙебеҙҙе халҡыбыҙҙың үгәй улдары һымаҡ итеп хис иткән ваҡыттар иң ауыры булғандыр. Магазиндарҙың кәштәләре ныҡ ҡына бушаған шул мәлдәр күптәрҙең хәтерендәлер. Ҡала урамында хәрби формала китеп барһаң, бәғзеләрҙең бармаҡ менән төртөп күрһәтеп, "Бынауынса әрәмтамаҡтарҙы аҫрап торғас, магазинда нимә етешһен инде", тигән һүҙҙәрен ишетеп ҡыйырһыған мәлдәр ҙә булманы түгел. Сираттағы ялыма ҡайтып барғанда, Екатеринбург ҡалаһында самолетҡа билет алырға сиратым килеп еткәс кенә бер оло йәштәрҙәге ҡатын "Һин бында торманың" тип, әрһеҙләшеп, мине сираттан сығарып ебәреүен дә хәтерләйем. Ҡатын кеше менән һуғышып булмай бит!.. Мине яҡлаусы ла табылманы... Урамда хәрбиҙәрҙе буштан-бушҡа туҡмап киткеләгән осраҡтар ҙа йышайҙы. Часть командованиеһы хеҙмәткә "гражданка" кейеме менән йөрөүҙе рөхсәт итергә лә мәжбүр булғаны хәтеремдә. Демобилизацияланған һалдаттарға ла ғәскәри формаһын сумаҙанына ғына һалып алып ҡайтырға кәңәш ителәлә ине.

Әммә, әмәлгә ҡалғандай, бындай осор оҙаҡҡа барманы, хөкүмәт тә, халыҡ та хәрбиҙәрҙең бәғзе ваҡыт кәрәк саҡтары ла булыу ихтималлығын ахырҙа аңлай башланы булһа кәрәк. "Бәхет килеүенә бәхетһеҙлек ярҙам итте", тигән әйтем йөрөй урыҫ халҡында. Күпмелер ваҡыттан, ысынлап та, Чечня һуғышы асылғас, хәрбиҙәргә ҡараш аҙлап ҡына булһа ла "йылына" башланғаны һиҙелде. Шул саҡ "Илгә ҡайғы килгән мәлдә генә хәрбиҙәргә ҡараш яҡшырырға тейешлеме", тигән әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙар биләп алғаны ла хәтеремдә... Ниҙелер емереүгә ҡарағанда төҙөүе күпкә ауырыраҡ һәм оҙағыраҡ булыуы хаҡында һәр кем белә. Бер-ике ай эсендә генә бөтөнләйгә тиерлек "нәжес"кә батырып бөтөргән әрмебеҙҙе ҡабаттан күтәрергә тотонғандарын да иҫләйем. Беҙ, иңебеҙҙә байтаҡ ҡына хеҙмәт тәжрибәһе булған хәрбиҙәр, әрмебеҙҙең элекке абруйын тулыһынса аяҡҡа баҫтырыу өсөн әллә күпме йылдар ваҡыт талап ителәсәген генә фаразланыҡ. Хеҙмәтемде тамамлаған осорға яҡыныраҡ, ил һаҡсыларына ҡарата булған элекке ыңғай ҡараш көскә-көскә ҡабаттан йүнәлеп бара ине...

### Ә милләттәштәр баһаланы

Бәләкәй балалар, әгәр кемдер берәү уны ситнәтә икән, шунда уҡ үҙен йәлләүсе, яҡлаусы булмаҫмы, тигәндәй, тирә-яғына ҡаранып, үҙенең берәй яҡынын эҙләй башлай. Тап бына шуның һымаҡтыр, хәрбиҙәргә "һалҡын" мөнәсәбәт бөтә Рәсәйҙә киң таралған һәм "модала" булған бер нисә йыл дәүерендә үҙ милләттәштәремә айырыуса иғтибар иттем. Ошо хаҡта ла бер ике һүҙ әйтмәй ҡала алмайым. Ғәскәри кешеләргә хөрмәт тойғоһо халҡыбыҙ һөйәгенә бик борондан һеңешкән булғанғамылыр, яҡташтарым ил һаҡсыларын ихтирам итеүҙән бер ҡасан да туҡталманы! Бына шуның өсөн уларға һәр саҡ рәхмәтлемен. Бөтә ил күләмендә барлыҡ идеологик саралар әрмебеҙҙе һәр яҡлап "ҡыйырһытҡан" тап ана шул мәлдәрҙә, баш ҡалабыҙҙың саҡырылыш пунктына йәш пополнение алырға командировкаларға килеп, төрлө редакцияларға ингеләп, үҙемдең буласаҡ ҡәләмдәштәрем менән әкренләп таныша башлағайным. Һәммәһенең дә мине - хәрби кешене бер туғаны йә яҡын дуҫы һымаҡ күреп, яғымлы итеп ҡаршы алыуҙары яҡташтарыма булған ихтирамымды тағы ла арттырҙы. Тәүге әҫәрҙәремдең береһенең ҡульяҙмаһын ниндәйҙер мөхәрриәткә алып ингәс, шунда ултырған оло ғына бер яҙыусы ағай мөхәрриргә: "Подполковниктың әйберен уҡып та тормайынса баҫып сығар ҙа ҡуй", - тип шаяртыуы хәтеремдә. Яҙылған нәмәнең "әйбер" тип аталғанлығын үҙ ғүмеремдә тәүгә ишеткәс, минә был һүҙ бик ирмәк һымаҡ булып тойолғайны. Әхмәр Үтәбай, Әмир Әминев, Венер Йәнбәков һәм башҡа абруйлы яҙыусыларҙың ҡырҡ йәшендә тәү мәртәбә яҙа башлаған кешенең әҫәрҙәрен ифрат йылы ҡабул итеүҙәре лә артабан яҙышыуымды дауам итеүгә дәртләндергәндер, тип уйлайым. Тәүге яҙған "Тау тотҡоно" тип аталған, хәрби темаға арналған повесымды Әхмәр Үтәбай мөхәррирләһә, Әмир ағай журналда баҫтырҙы. Шул арала "Шоңҡар"ҙың баш мөхәррире булып Әмир ағайҙың алмашына килгән Иршат Теләүембәтовтың мине "Йыл лауреаты" итеп иғлан итеүенә башта ышана ла алмай торҙом! Был ваҡиғаны мин яҡташтарыбыҙҙың барлыҡ хәрби кешеләргә, ғөмүмән, әрмебеҙгә булған оло ихтирамы тип ҡабул иттем. Бер аҙҙан "Киске Өфө", "Йәшлек", һәм башҡа мөхәрририәттәрҙә хеҙмәт иткән милләттәштәрем менән дә танышып алдым. Ниһайәт, оҙаҡ йылдар тыуған яҡтарымды һағынып, зар-интизар булып, ҡасандыр ифрат алыҫ булып тойолған хыял йондоҙома барып етергә ирешергә, йәғни, Башҡортостаныма йәшәргә ҡайтырға Аллаһы Тәғәлә насип иткән икән. Халҡымдың мине шулай йылы ҡаршы алыуын оло бәхеткә һанайым. Тыуған яғында йәшәп, көн дә туған телеңдә һөйләшеү, үҙ динеңде тотоп, яҡташтарың менән тигеҙ сафҡа тороп йома намаҙҙарын үтәү, яҡындарыңдың да әле бер, әле икенсеһенең хаҡ юлға - иманға килеүҙәрен күреү үҙе бер бәхет бит! Һәр ир-аттың да хәрби хеҙмәтен имен-аман тамамлауын, һәммәһенең дә шул хаҡта гел генә тик яҡты хәтрәләре ҡалыуын Аллаһ Тәғәләнән һорайым. Ә һалдат йырҙары фәҡәт тыныс шарттарҙағы хеҙмәт хаҡында ғына йырланһын, иншаллаһ. Мәҡәләмде Әкрәм Дауытов яҙған йыр күплеты менән тамамларға булдым:

*Шинелем, шинелем,*
*Тынғыһыҙ күңелем,*
*Берүк саң бөртөгө теймәһен!*
*Эленеп шул көйгә*
*Һаҡланһын һәр өйҙә,*
*Тик бөтә ил шинель киймәһен!*

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы подполковник.**

**(Аҙағы. Башы 8-се һанда).**

**✓ *Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының тупһаһын аша атлап уҙғас та башҡорт телмәрен ишетәһең. Сөнки бында уҡыған балалар туған телдәрендә аралаша, башҡорт рухлы ла улар.***



ҒАИЛӘМ - ҠӘЛҒӘМ

**Башҡортостан Республикаһында "Ғаилә йылы"на арналған саралар үткәрелә башланы ла инде. Дәүләт кимәлендә генә түгел, белем биреү учреждениелары, йәмәғәт ойошмалары тарафынан да уртаҡ эшкә бер өлөш индерелә. Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында үткәрелгән "Татыу ғаилә - ил күрке" ғаилә ҡиммәттәре фестивале проектының презентацияһы нәҡ шундай сара булып сыҡты.**

# ТӘРБИӘ ҺАБАҠТАРЫ...

## аралашыуҙарҙан да тыуа



Был фестиваль гимназия, уның ата-әсәләр комитеты, "Гимназистар ҡоролтайы" юғары класс уҡыусылары советы, "Аманат" мәрхәмәтлек фонды, БР Яҙыусылар һәм БР Рәссамдар союздары тарафынан йәш быуынды тәрбиәләүҙә ғаилә ҡиммәттәренең әһәмиәтен үҫтереү һәм һыныту, ғаиләләргә мөнәсәбәттәрҙе көйләү маҡсатында уҙғарыла. Ул йыл дауамында барасаҡ һәм белем усағында уҡыусылар, уларҙың ата-әсәләре, олатай-өләсәйҙәре, билдәле шәхестәр ҡатнашлығында тематик дәрестәр, осрашыуҙар, фольклор байрамдары, спорт ярыштары, конкурстар, байрам саралары ойоштороу ҡаралған. Фестивалгә старт "Батыр егет - ил күрке" тип аталған бик йөкмәткеле саранан башланды. Гимназияла белем алған уҡыусыларҙың өлгөлө атай-олатайҙары асыҡ дәрестәргә саҡырылды. Туғыҙынсы синыф уҡыусыһы Эдуард Саргаевтың олатаһы РФ һәм БР атҡаҙанған табибы, юғары категориялы хирург Марс Юлдашев Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан атаһы Тимербулат Миңлеғәли улының батырлыҡтары, михнәтле йылдар тураһында иҫтәлектәрен һөйләне. Был хәтирәләр һуғыш бөтөү тураһындағы яңылыҡты бөтә ил халҡы ниндәй ҙур ҡыуаныс менән ҡабул итеүе, илһөйәрлек, батырлыҡ төшөнсәләре хаҡында булды. Ошо уҡ синыф уҡыусыһы Кәрим Латипов та олатаһы - Советтар Союзы Геройы Ҡотдос Латиповтың яу ҡырында күрһәткән батырлыҡтары тураһында һөйләне. Гимназияның Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарына арнап йыһазландырылған уҡыу кабинетында үткән был дәресте уҡыусылар йотлоғоп тыңланы. Ошондай уҡ быуындар араһында бәйләнештәрҙе нығытыуға булышлыҡ иткән, тәрбиәүи йәһәттән әһәмиәтле дәрестәрҙә Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Зәһрә Исмәғилева, СССР-ҙың Почетлы энергетигы, техник фәндәр кандидаты Шамил Әбдрәшитов, БР Фәндәр академияһы ағзаһы, профессор Ғиниәтулла Ҡунафин, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы солисы Марсель Ҡотоев, БР-ҙың халыҡ артистары Сара Буранбаева, Филүс Ҡаҙаҡбаев һәм уларҙың ғаилә ағзалары ҡатнашты. "Татыу ғаилә - ил күрке" ғаилә ҡиммәттәре фестиваленең тәүге сараһына юҡҡа ғына ир-егеттәр саҡырылмаған, ойоштороусылар ғаиләлә көслө заттың абруйын арттырыу, өлгөлө атай-олатайҙар миҫалында буласаҡ ғаилә башлыҡтарына дөрөҫ тәрбиә биреү маҡсатын да күҙаллаған. Осрашыу гимназия уҡыусыларының күңеленә хуш килеүе тураһында әйтеп тораһы ла түгел, асыҡ дәрестәрҙән һуң тамаша залына шығырым тулып йыйылған балаларҙың ихлас алҡышы, үҙ-ара тәьҫораттары менән бүлешкәнен ишетеп-күреү ҙә етте. Килгән ҡунаҡтар ҙа тик ыңғай тәьҫораттар алыуы тураһында һөйләне.

- Был бик әһәмиәтле сара, - тине профессор Ғиниәтулла Ҡунафин. - Бөгөн интернет заманы, унан күпме мәғлүмәт алырға була, тибеҙ. Ләкин бында күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү, өлкән быуын менән йәш быуындың аралашыуы мөһим. Халыҡ әйтмешләй, "Аҡмаһа ла тама" тигән һүҙ бар. Бына шул "тамыу" тигәндең дә мәғәнәһе бар, ҙур булып тамған нәмәнең дә файҙа килтермәүе бар, ә бәләкәй генә тамсының да бала күңелендә уйылып ҡалып, киләсәктә уның ниндәйҙер хата аҙымдарҙан һаҡлап алып ҡалырға, йә булмаһа ниндәйҙер ынтылыштарға этәргес биреүсе бер бәләкәй генә булһа ла импульс булып китеүе бар. Шуға гимназия быңдай сараларҙы үткәреп бик дөрөҫ эшләй...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһында үткәрелгән "Татыу ғаилә - ил күрке" ғаилә ҡиммәттәре фестивале сиктәрендә март айында "Бала шатлығы - әсә шатлығы", апрелдә - "Хеҙмәт төбө - хазина", майҙа - "Батыр үҙе өсөн тыуа, иле өсөн үлә", июндә - "Ғаиләм - минең ҡәлғәм", сентябрҙә - "Һөнәрле ғаилә - бай ғаилә", октябрҙә - "Беҙҙең өйҙөң йәме", ноябрҙә - "Ғаилә - бәхет асҡысы" тигән темаларға бағышланған сағыу саралар планлаштырылған. Ошо атамаларға күҙ һалып та ойоштороусыларҙың башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәренә, йолаларына, әҙәп-әхлаҡ нигеҙҙәренә таянып, йәш быуынды тәрбиәләүгә йүнәлтелгән фиҙаҡәр хеҙмәтен юғары баһаларға мөмкин. Изге ниәттән башланған был эш уңышлы тамамланһын, тип теләргә генә ҡала.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЕГЕРМЕНСЕЛӘР ҺЫНАТМАЙ!

**Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында Халыҡ-ара туған телдәр көнө айканлы күркәм байрам кисәһе уҙғарылды. Унда БР Яҙыусылар союзы рәйесе Зәки Әлибаев, күренекле шағир Рәшит Шәкүр, "Шоңҡар" йәштәр журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, яҙыусы Гөлнур Яҡупова, Өфө ҡалаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары конкурсы еңеүсеһе Нурзилә Нәҙерғолова һәм башҡа саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты.**



Балалар менән саф башҡортса ауыҙ тултырып һөйләшеү хәҙерге көндә һирәгерәк осрай торған хәл. Әммә Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһының тупһаһын аша атлап уҙғас та, күңелде күтәреп, ҡолаҡты иркәләп яңғыраған башҡорт телмәрен ишетәһең. Сөнки бында уҡыған барлыҡ балалар туған телдәрендә аралаша, ул ғына ла түгел - башҡорт рухлы ла улар. Әлеге байрам сараһында ла гимназия уҡыусылары ошо матур гәҙәттәренә тоғро ҡалып, тамашасыларға йыр-моңдан, дәртле бейеүҙәрҙән, тәрән мәғәнәле һәм һәр һүҙе кеше күңеленә үтеп инерлек шиғри юлдарҙан торған сағыу концерт ойошторҙо. Форсат менән файҙаланып, үткәрелгән төрлө конкурстарҙың район кимәлендәге еңеүселәренә маҡтау ҡағыҙҙары, еңеүсе таныҡтамалары тапшырылды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк олимпиадаларының муниципаль кимәлендә еңеүселәре тәбрикләнде.

Шулай уҡ Өфө ҡалаһының "Илһам" нәфис һүҙ һөйләү оҫталары конкурсында еңеп сыҡҡан ун уҡыусы һәм педагог сәхнә түренә күтәрелде. "Республикамды данлайым" конкурсында башҡорт, рус, татар, немец, украин, поляк, әрмән телдәрендә башҡарылған 210 ижади эш авторы араһынан иң юғары баһаға лайыҡ тип табылған утыҙ уҡыусы ла ошонда ҡотлау һүҙҙәре тыңланы. "Тыуған ҡалаң тураһында һөйлә" конкурсында ҡатнашҡан 51 бәйгесе араһында иң шәп эш авторҙары булған дүрт уҡыусы маҡтау ҡағыҙҙары алды. Халыҡ-ара туған телдәр көнө байрамы сиктәрендә әүҙем, үҙ телен яҡшы белгән, хөрмәт иткән балаларҙың тырышлығын юғары баһалап, сәхнә түренә тағы бер мәртәбә күтәрелергә мөмкинлек биргән ойоштороусыларҙың маҡсаты бер - һәр бала күңелендә туған телде белгән саҡта кәм-хур булмаҫһын, тигән фекерҙе һеңдереү. Байрамға килгән ҡунаҡтарҙың һәр береһе ошо турала һөйләп кенә ҡалмай, асыҡ миҫалдар ҙа килтереүе бигерәк тә отошло булды. Рәшит Шәкүрҙең туған телдә һөйләшеү ниндәй мөмкинлектәргә юл асыуын дәлилләп, Мөнир Ҡунафин "Шоңҡар" йәштәр журналында баҫылған мәҡәләләрҙең геройҙары, юғары уңыштар ҡаҙанып өлгәргән башҡорт йәштәренең портреттарын күрһәтте. "Был йәштәр барыһы ла бөгөн уңышлы кешеләр, үҙ эшен асып аҡса эшләйҙәр, юғары белем алып вазифалар биләйҙәр, өлгө алырлыҡ шәхестәр. Һәм улар бөтәһе лә саф башҡорт телендә һөйләшә, бына шундай кешеләргә оҡшарға тырышырға кәрәк", - тине Мөнир Ҡунафин.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балаға шулай эшлә, былай ит, тип ҡат-ҡат өйрәтеп тороуға ҡарағанда, үҙең бер тапҡыр дөрөҫ эшләп күрһәтеү күпкә һөҙөмтәлерәк, тиҙәр. Халыҡ-ара туған телдәр көнө байрамында Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы уҡытыусыларының хеҙмәте шуға нигеҙләнеүе асыҡ сағылды. Үҙең үтәмәгән шартты башҡаларҙан талап итеп булмай, ә гимназия уҡытыусылары үҙҙәре лә башҡорт халҡының мәҙәниәтен, сәнғәтен, тарихын мөкиббән китеп ярата һәм уҡыусыларын да инандыра белә.**

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КЕМГӘ ОҠШАП... аҡыллы?

■ Күҙҙәрҙең сәләмәтлеге өсөн брокколи ашағыҙ, тип кәңәш итә Америка ғалимдары. Был йөшелсәләге индол-3-карбинол берләшмәһе организмды токсиндарҙан таҙарта. Йәш өлкәнәйә барыу менән арилуглеводород рецепторы эше һүлпәнәйә, күҙҙәр насарыраҡ күрә башлай, тәрлә специфик ауырыуҙар барлыҡҡа килә. Брокколи составындағы берләшмә ошо репецторҙарҙы әүҙемләштерепебәрә лә инде. Брокколи составына аҡымдар, майҙар, күҙәнәклек, селен, магний, калий, кальций, фосфор, тимер, цинк кеүек төрлө минераль берләшмәләр, С, РР, Е, К, U, бета-каротин витаминдары инә. С витамины әфлисунға ҡарағанда ике тапҡыр күберәк. U витамины сей яраларҙы булдырмай. Был витамин тағы ла спаржала бар.

■ Баланың интеллект кимәлен билдәләйәсәк гендар уға әсә кешенән күсә, ти ғалимдар. Сөнки был гендар Х-хромосома менән бәйле. Был осраҡта инә "ҡулайлаша белгән гендар" тураһында һүҙ бара, улар балаға әсәнән күсһә - эшләйҙәр, ә атанан күсһә, баҫылып ҡалалар. Шулай ҙа атайҙарҙың гены фекерләй белеү ҡеүәһенә йоғонто яһамай, тип уйлау хата, ти профессор Дженнифек Дельгадо. Улар баш мейеһенең хис-тойғолар һәм инстинкт, шулай уҡ асыҡыу тойғоһо, агрессия өсөн яуап биргән өлөшөндә туплана. Әсәйҙән күскән күҙәнәктәр мейенең фекерләү, ҡабул итеү, хәтер, телмәр өсөн яуап биргән өлөшөндә йыйыла. Тик бөтөн нәмә лә гендар менән бәйле түгел икән. Бынан бер нисә йыл элек Миннесота штаты эксперттары асыҡлауынса, үҙенең әсәһенә нығ яҡын булһа, 2 йәшендә үк ҡатмарлы абстракт уйындар уйнай башлай ала, нығыҡшмалыраҡ була, проблемалар килеп тыуғанда артыҡ бошонып бармай. Вашингтон тикшеренеүсәләре раҫлауынса, әсәһенең иғтибарын һәм яҡлауын тойған балаларҙың гиппокамп күләме ҙурыраҡ була. Баш мейеһенең был өлөшө белем алыуға, уны хәтерҙә ҡалдырыуға яуап бирә.

■ Киҙеүҙән, һалҡын тейҙереп ауырыуҙан ҡурҡһағыҙ, иртәрәк йоҡларға ятығыҙ, ти Британия ғалимдары. Улар 22 меңдән ашыу кешене тикшереп, йоҡо туймай йөрөгән саҡта һалҡын тейҙереү мөмкинлеге лә артыуын асыҡлаған. Тәүлегенә 5 сәғәт кенә йоҡлаусылар юғары хәүеф төркөмөндә. Уларҙың иммунитеты инфекцияларға ҡаршы насар көрәшә. Был төркөмдәгеләрҙә тамаҡ-тын юлдары инфекциялары сирҙәре 50 процентҡа күберәк осрай. Етмәһә, уларға ҡабаттан ауырыу әләктереү хәүефе лә янай. Быңдай күнелһеҙлек булмаһын өсөн ете сәғәт йоҡларға кәрәк. Иммунитетты нығытыуҙа йоҡоноң өлөшө ифрат ҙур.

■ Шәкәр - баш мейеһе өсөн төп энергия сығанағы. Дөрөҫөрәге, шәкәр һәм углеводтарҙан барлыҡҡа килгән глюкоза. Шуға ла тәм-том ашағандан һуң баш яҡшыраҡ эшләй башлай. Әммә был ваҡытлыса ғына тәьҫир. Шәкәр артыҡ булһа, киреһенсә, хәтер насарая, кеше үҙен хәлһеҙ тоя. Шуға ла шәкәр артыҡ ауырлыҡҡа алып килмәһен өсөн, уны сама менән ҡулланырға кәрәк. Баш мейеһе эшмәкәрлегенә омега-3 кислотаһы ла яҡшы тәьҫир итә. Ул инсульт, аҡыл еңеләйеүҙән һаҡлай, хәтерҙе нығыта, йөрәккә лә файҙалы, хатта простата яман шеше хәүефен дә түбәнәйтә. Омега-3 балаларҙа астма булдырмай. Был майлы кислота балыҡта күп. Халҡыбыҙҙың традицион тукланыуына әйләнеп ҡайтһаҡ, омега-3 ҡаҙылыҡта бар.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**"Кәмселекһеҙ кеше булмай" - бөтәбеҙгә лә билдәле әйтем. "Кешегә хаталаныу хас" - был осраҡта мосолманға ла ташлама юҡ, сөнки был хәҡиҡәтте Мөхәммәт бәйғәмбәр ғәләйһис сәләм дә дәлилләгән: "Бөтә кешеләр ҙә хаталана". Аллаһ илсеһе гонаһлы булып ҡалмаҫҡа, ә тиҙерәк тәүбә итергә ҡуша: "Һеҙҙең арала хаталаныусыларҙың иң яҡшыһы - тәүбә итеүсе". Ул тәүбә итә белеүселәргә Аллаһтың рәхмәте сикһеҙ һәм ишектәре киң асыҡ икәнлеге тураһында хәбәр итә. Яҡшы мосолман үҙенең хатаһын тиҙерәк төҙәтергә ашығасаҡ. Ҡайһы берәүҙәрҙең үҙенең хатаһын күрә белмәйенсә, башҡаларҙы тикшереүе - ысын мосолманға бөтөнләй хас түгел.**



# ҒӘФҮ ҮТЕНӘ БЕЛӘҺЕҢМЕ?

Мосолмандың мөһим сифаттарының береһе - "төҙәтә белеү". Камиллашыу юлынан атлаған саҡта ул яңылыш аҙым эшләмәҫкә, әгәр ҙә эшләһә, тиҙ арала хәлде яҡшы яҡҡа үҙгәртергә тырыша.

Мосолман үҙенең гонаһтарын бер ҡасан да әһәмиәтһеҙ тип һанарға тейеш түгел, сөнки Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм әйткән: "Мосолман үҙенең гонаһтарын өҫтөнә ишелеп төшөргә торған тау кеүек күрә. Үҙенең гонаһтарына өйрәнгән кеше уны танауы осона ултырған себен кеүек күрә". Бер һүҙ менән әйткәндә, яҡшы мосолман бөтөнләй хаталанмаған кеше түгел, ә үҙенең хаталары өсөн ғәфү үтенә һәм ғәфү үтенеү юлдарын эҙләүсе.

Кеше - ул ижтимағи-мәҙәни ысынбарлыҡ. Ул бөтә нәмәгә лә тиҙ өйрәнә, йәмғиәт тормошо менән йәшәй ала, кешеләр менән яҡшы мөнәсәбәттәр ҡора ала. Ғәфү үтенә белеү тәү ҡарамаҡҡа ябай күренһә лә - кешенең мәҙәни һәм ижтимағи тормошҡа ҡарағанлығының бер күрһәткесе ул.

Түбән ҡатламда эшләүселәр генә түгел, ә бөтәһе лә, хатта дәүләт үҙе лә ғәфү үтенергә тейеш. Беҙ йыш ҡына ҡасандыр гәҙелһеҙ рәүештә хөкөм ителгән кешеләрҙең исемдәрен, хөрмәт күрһәтеү һәм ғәфү үтенеү маҡсатында, төрлө майҙандарға, биналарға ҡушыуҙарын күрәбеҙ.

Ғәфү үтенеү - үҙеңде түбән төшөрөү түгел, киреһенсә, был ғәмәл кешене юғары күтәрә һәм үҫтерә. Был осраҡта беҙгә үҙенең гонаһлыҙлығы, хаталарҙан ҡаса белеүе, кешеләргә ҡарата әҙәплелеге, иғтибарлы булыуы менән билдәле булған Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис сәләм өлгө булып тора. Бер вәғәзе ваҡытында ул халыҡ төркөмөнә ҡарап, былай тип мөрәжәғәт иткән: "Әгәр ҙә мин һеҙҙең кемегеҙҙе булһа ла һуҡһам - бына минең арҡам, һуғығыҙ; әгәр ҙә мин кемегеҙгә ҡулһа ла бурыслы булһам, бына минең мөлкәтем, килеп алығыҙ". Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙенең кемгәлер ҡарата мөмкин булған иғтибарһыҙлығы өсөн шулай әҙәпле генә ғәфү үтенгән.

Шулай булғас, ғәфү үтенә белеү нимәнән ғибәрәт һуң? Был беҙҙең тормошҡа ниндәй мәғәнә бирә? Иң беренсе сиратта, был - кешенең үҙен аңлауы. Был бөтә кешеләрҙең дә, шул иҫәптән беҙҙең дә хаталаныуыбыҙ мөмкин икәнде һөйләй.

Бүтәндәрҙән үҙеңде өҫтөн күреү тойғоһон кисереү яҡшы түгел. Үҙеңдең уйламаған аҙымың өсөн яҡыныңдан ғәфү үтенеп, беҙҙә киләсәктә был хатаны ҡабатланмаҫҡа тигән телә уяна. Ғәфү үтенеү гәҙел булырға, шулай уҡ башҡаларҙың ҡәҙерен белергә һәм хөрмәт итергә өйрәтә. Кемдән ғәфү үтенгәнһегеҙ, шул иғтибар һәм хөрмәт ҡаҙана. Үҙенә булған хөрмәтте күреп, ул әңгәмәсеһенә шулай уҡ яуап бирәсәк. Шулай итеп, тупаҫ ҡылыҡтарыбыҙ өсөн ғәфү үтенергә көс табып, беҙҙең һәр беребеҙ үҙенә икенсе күҙлектән ҡарай, башҡа кешеләргә хөрмәт итергә өйрәнә, һәм шуның менән йәмғиәт тәртибенә нигеҙ һала. Шулай уҡ, Аллаһ Тәғәләнән ғәфү үтенеү һәм тәүбә итеү - беҙҙең динебеҙҙең бер ҡағиҙәһе. Раббыһынан ғәфү үтенә белеүсе мосолман кешеләрҙән дә ғәфү үтенә белә.

Беҙ, әлбиттә, кемделер төкөп китһәк, йә бысратһаҡ, аяғына баҫһаҡ ҡына ғәфү үтенеп өйрәнгәнбеҙ...

Үҙеңдең гәйебеңде танымау - беҙҙең дәүерҙән етди ауырыуы. Кешеләргә был ауырыуҙан ҡотҡарыр өсөн күп көрәшергә тура киләсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

Үҙенең дини бурыстарын тулыһынса үтәмәгән иманлы кеше - Аллаһтан;

Һайлау алдынан биргән вәғәҙәләрен үтәмәүсе сәйәсмәндәр - халыҡтан;

Хөрмәт күрһәтә белмәүсе бала - атаәсәһенән;

Мираҫты тигеҙ бүлмәүсе һәм ата-балалар аманатын һаҡламаусы ейән - олатаһынан;

Яратмағаны һәм хөрмәт итмәгәне өсөн ире - ҡатынынан;

Ата-әсә әҙ иркәләгәне өсөн - балаларынан;

Эш хаҡын түләмәгәне өсөн директер - эшсеһенән;

Тупаҫ түрә - хеҙмәткәренән;

Әҙерләкһеҙ дәрес биргән өсөн уҡытыусы - уҡыусыһынан;

Тәкәббер студент - уҡытыусыһынан һәм үҙен шәхес итеп күрергә теләгән башҡа кешеләрҙән;

Ғауғалы пассажир - әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙән;

Тупаҫ шофер - пассажирҙарҙан;

Гәҙел булмаған һатыусы - һатып алыусыларынан ғәфү үтенергә тейеш.

Әйтеп киткәнебеҙсә, үҙеңдең хаталарыңды танымау һәм ғәфү үтенә белмәү - етди рухи ауырыу. Шайтан да бит үҙенең ғорурлығы арҡаһында Аллаһы Тәғәләгә ҡаршы килә һәм ҡарғыш ала. Беҙгә уның юлынан барыу тыйылған. Шулай булғас, әйҙәгеҙ, үҙебеҙҙең хаталарҙан ҡасырға тырышайыҡ. Әгәр ҙә яңылыш ҡына гәҙелһеҙлеккә юл ҡуйһаҡ, тиҙ арала ғәфү үтенәйек.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# МАЛ ДА ДОҒАҒА МОХТАЖ



**Ауыл халҡы өсөн хәҙер мал аҫырыу, уның именлеген тәьмин итеү оло бер проблемаға әйләнде. Дүрт аяҡлы йыртҡыс йәнлектәрҙән дә, ике аяҡлы енәйәтсе әҙәмдәрҙән дә һаҡларға тура килә мал-тыуарҙы. Әммә һаҡлау яйын күрергә кәрәк, сөнки малға, унан килгән килемгә ҡарап тора бит ауыл кешеләре.**

Беҙ - атай-олатайҙарҙың мал-тыуарҙы һаҡлау йолаһын нисек атҡарғандарына шаһит булып үҫкән быуын. Ул йолаларҙы, халҡыбыҙҙың һынаған ысулдарын, хәтер һандығынан соҡоп сығарып, әле лә ҡулланабыҙ, йәштәргә өйрәтәбеҙ. Был йолаларҙы, әлбиттә, малды ғына түгел, үҙеңде, балаларыңды һаҡлау, йорт-ҡаралтыңдың именлеге өсөн дә ҡулланырға була. Сөнки һаҡланғандың һағы ятыр, тиҙәр бит.

Беҙ ниндәйҙер ғәмәлде Аллаһы Тәғәлә ихтыярына тапшырғанда, Уның исемдәрен ҡулланабыҙ. "Йәә Аллаһу Раҡыип" (күҙәтеүсе, һаҡлаусы зат), тип ҡабатлайбыҙ башлыса. Әлеге исемде мал урамға сыҡмаҫ элек ете тапҡыр әйтеү кәрәк. Малдың өҫкө, аҫҡы, алғы-артҡы, ике яҡ ҡабырға яғына ҡарап, күңелдән генә "Йәә Аллаһу Раҡыип" тип әйткәс, малды ҡараш менән иңләп алаһың. Малдың һыртына махсус һаҡлағыс - ай билдәһе ҡуяһың. Шунан өф тип малға өрәһең. "Йәә Аллаһу Раҡыип" тип әйтә-әйтә, малдарҙы ҡапҡанан көтөүгә сығараһың.

Һарыҡтарҙың йөнөн алғас, бер шәлкем йөнөнә "Фәтихә" сүрәһен уҡый-уҡый, сепрәк үреп ҡуябыҙ.

Яңы ай тыуғанда боронғолар һүҙен дә иҫкә төшөрәбеҙ: ай күрҙем аман менән, кәртәм тулы мал менән...

Тулы ай мәлдәрендә "фәтә бәрәкәллаһу ахсанул халикин" (Аллаһу барлыҡҡа килтергәндең яҡшыһына бәрәкәт) тип, мал-тыуарға доға уҡыу кәрәк.

Көҙөн, малды ҡураға япҡас, бер биҙрә ҡомға "Әәмәнәррәсүлү"не (Бәҡәра сүрәһенең 285-се аяты) уҡып, уны болғайбыҙ. Аҙаҡ ҡомдо һарай эргәһенә, мал йөрөй торған юлдарға әҙләп һибәбеҙ.

Ҡайһы саҡтарҙа мал һунлай, йә көтөүҙән айырыла. Һаҡланһын өсөн "Әд-Духәә" сүрәһен уҡыйбыҙ.

Бына шулай һаҡлайбыҙ хәләл генә малҡайҙарҙы, ярҙамы тейәме-юҡмы икәнлеген белер өсөн тәүҙә үҙегеҙҙә һынап ҡарағыҙ. Иллә-мәгәр беҙҙең малдарға файҙаһы тейә.

Зәбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.
Учалы районы Сораман ауылы.

*МИНЕҢ ТӘЖРИБӘМ*

# ҺУҠЫР СЫСҠАН ЙОНСОТАМЫ?

**Һуңғы йылдарҙа баҡсаларҙа ер аҫты йәнлеге - һуҡыр сысҡан ныҡ йонсота башланы. Бер йылы гөрләп үҫеп ултырған помидор, ҡыяр, ҡарбуз-ҡауындарҙың тамырын кимереп, ҡоротоп бөтөрҙө. Хатта нисәмә йылдар емеш биреп ултырған виноградты ҡоротоп ҡуйҙылар.**




Ишетеүемсә, һуҡыр сысҡандар районыбыҙҙың башҡа ауылдарында ла, Башҡортостандың башҡа районларында ла күпләп таралып, ҙур зыян килтерә икән. Бер нисә кешенән ишеткәнем бар ине: был йәнлектәр зыңғырлап торған тауыштан ҡурҡып, йәшәгән ерҙәрен ташлап, икенсе яҡҡа күсеп китеүсән, имеш. Ошонан сығып, быltыр яҙ башы менән бер ҡоролма эшләп ултырттым. Был ҡоролма бала саҡта үҙебеҙ эшләп, елгә ҡаршы тотоп йүгереп йөрөй торған өйрөлтмәкте хәтерләтә. Тик өйрөлтмәктең зыңғырлау тауышы көслөрәк булһын өсөн мин уны өсәүлә итеп эшләнем (һыҙманы ҡара).

Төҙөлөшө: өйрөлтмәктәрҙең остары 60 мм-ға бер-береһен ҡаплап, әйләнгән саҡта бәрелешеп, сыңғырлап торған тауыш сығара. Ике ситтәгеһе бер яҡҡа әйләнә, ә урталағыһы киреһенсә әйләнә. Һәм бер-береһенә бәреләләр. Тиҙ ашалмаһын өсөн уларға трубканан подшипник ҡуйыла һәм өйрөлтмәк ныҡытыраҡ болғанһын, бер-береһенә күберәк һуғылһын өсөн подшипник менән үҙәктең аралығы киң булырға тейеш (0,5 мм самаһы). Ҡоролма елгә ҡаршы әйләнеп йөрөһөн өсөн уны ҡолға осона трубканан эшләнгән подшипнигы менән үҙәккә ултыртырға кәрәк. Ҡоролма ултырышлы булһын өсөн уның аҫтындағы шайба киң булырға тейеш. Ҡоролманы күсереп йөрөтөү өсөн уны ҡолғанан сыҡындырып алып була. Ҡолға ергә ҡағып ҡуйылған тимер торбаға урынлаштырыла, уны кәрәк саҡта икенсе урынға күсереп ултыртырға уңай була. Уның өсөн төрлө ерҙәргә торбалар ҡағып сығырға кәрәк. Өйрөлтмәктәрҙең ҡанаттары еңел булһын өсөн алюмин ҡалайҙан эшләнгән һәм ныҡлыҡ биреү өсөн ситтәре бөгөлгән.

Ҡоролма нисек эшләй? Өйрөлтмәктәр ел ваҡытында бер-береһенә һуғылып, зыңғырлап әйләнә башлайҙар һәм был тауыш ҡолға буйлап төшөп, ер буйлап 30-40 метрға тарала. Ошо тауыштан ҡурҡып, һуҡыр сысҡандар был ерҙе ташлап китергә мәжбүр була.

Һуҡыр сысҡандан (был йәнлекте Белорет яҡтары төрткө тип йөрөтә) ҡотолоу өсөн хәҙер Чистон-III тигән приборҙы сығарып һаталар. Ул 1000 квадрат метр ерҙе һаҡлай тип әйтелгән ҡулланмаһында. Тик уны эшләтеү өсөн 1.5 вольтлы 4 батарейка кәрәк, улар 1 айға ғына етә һәм сығымды күп талап итә.

Шуныһын да әйтеп китергә кәрәк: быltыр баҡсама ултыртҡан йәшелсәләрем һәйбәт уңыш бирҙе, сөнки һуҡыр сысҡандар яҡын да килә алманы.

**Ҡасим ЯНБАЕВ.**
**Ейәнсура районы Үргә Бикбирҙе ауылы.**

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

# РАУЗА ҮҪТЕРГЕҢ КИЛҺӘ...



**Бүләк ителгән рауза гөлләмәһенән тамырландырып, баҡсала ла үҫтерергә була.**

Һулымаҫ элек үк раузаның сәскәһен ҡырҡып ташлайбыҙ. 2-3 бөрөһөн ҡалдырып, сәскә һабағының өҫкө өлөшөн ҡырҡып алабыҙ. Япраҡтар ҙа кәрәкмәй, теләһәгеҙ, 1-2-һен ҡалдыра алаһығыҙ. Эре картуфтың күҙәүен сөкоп алып, ошо картуфҡа әҙерләнгән рауза һабағын сәнсеп ҡуябыҙ. Картуфты стаканға йә гөл һауытына ҡуйып, һыу ҡоябыҙ һәм полиэтилен пакет менән ҡаплап, 40 көнгә тәҙрә төбөнә ҡуябыҙ. Ваҡыты-ваҡыты менән пакетты алып, елләтәбеҙ, кәрәк булһа, һыу ҡоябыҙ. Картуфтан бөтөн кәрәкле матдәләрҙе алған рауза яҡшы тамырлана. 40-50 көндән пакеттан алып, гәзәти бүлмә гөлө кеүек тәрбиәләйбеҙ, туҡландырабыҙ. Яҙ аҙағында баҡсаға күсереп ултыртабыҙ.

Әйткәндәй, насар тамырлана торған бөтөн үҫемлектәрҙе лә картуф бүлбеһендә тамыр йәйҙерегеҙ. Дым етерлек булһын. Үҫемлек тамырландырған һыуға бал йә алоэ һуты өҫтәргә була. 1,5 л һыуға 1 балғалаҡ бал өҫтәйһең дә, үҫемлекте ошо һыуҙа 12 сәғәт тотаһың. Алоэ һуты үҫемлектең иммунитетын да ныҡыта. Һыуға 3-7 тамсы һут тамыҙырға. Тал сыбыҡ торған һыу ҙа тамыр йәйҙереүгә булышлыҡ итә. Ҡыҙыҡ өсөн һынап ҡарағыҙ. Тал сыбыҡтарын тамырланғансы һыуҙа тоталар. Шунан сыбыҡтарҙы алып, ошо һыуға тамырландырырға теләгән үҫемлектәрҙе ҡуялар. Һыуҙы алыштырмайҙар, кәрәк саҡта өҫтәп кенә торалар. Был маҡсатта тирәк сыбыҡтарын ҡулланырға ла ярай. 1 л һыуға 100 мг сүпрә һалып, ошо һыуға 1 тәүлеккә үҫентеләрҙе ҡуйырға. 1 тәүлектән һуң йыуып, таҙа һыуға күсерергә.

Шуны ла белеп ҡуйығыҙ: баҡсала рауза үҫкән ергә тимер сөйҙәр, консерва банкаларын күмегеҙ. Тутыҡҡан саҡта тимер үҙенсәлекле формаға инә һәм был ваҡытта унан үҫемлектәр туҡлана ала. Тимер оксидын етерлек кимәлдә алған раузалар сәләмәт, сәскәләренең төҫө сағыуыраҡ була.

*БАҠСА*

# ҮҪЕНТЕ СӘСЕР МӘЛ



**Баҡса өсөн үҫентеләр сәсеү мәле яҡынлаша. Сельдерейҙы ҡайнар һыу һибелгән тупраҡҡа сәсергә кәңәш биргәйне кемдер. Шул йылды сельдерей яҡшы уңыш бирҙе. Киләһе яҙ базилик, порей һуғанын, кәбеҫтәне шулай сәстем. Һуңынан сәскәләрҙе шул рәүешле сәсә башланым.**

Пластик контейнерҙарға тупраҡ тултырғас, өҫтөнә ҡайнаған һыу ҡоябыҙ һәм өҫтөнә орлоҡто һибәбеҙ, бер аҙ үс менән баҫырабыҙ. Ҡара төҫтәге пакетҡа урайым да, 40-50 минутҡа торбаға ҡуйып торам. Бынан һуң контейнерҙы йылы урынға ултыртабыҙ. Ҡайһы берҙә орлоҡтоң өҫтөнә ҡоям ҡайнар һыуҙы. Һөҙөмтәһе - бер үк. Ҡайнар һыуҙан орлоҡтар зарар күрер тип ҡурҡмайһығыҙмы, тип һорауҙарға шундай кәңәш: орлоҡтарҙы ике өлөшкә айырығыҙ, береһен - үҙегеҙҙең ысул, икенсеһен ошо кәңәш буйынса сәсеп ҡарағыҙ.

Тупраҡты магазиндан һатып алам һәм төбәккә ярашлы "Ай календары" буйынса сәсәм. Әйткәндәй, ҡыяр сәсеү өсөн дә ҡулай ысул. Түтәл яһағас, уға янған тиҙәк, көл өҫтәйем, яҡшы итеп һыу ҡоям. Бер нисә сәғәт үткәс, ҡайнар һыу һибәм. Шунда уҡ ҡыяр орлоҡтары төртөп сығам, түтәлде пленка менән ҡаплайым.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

Тормошта ауырлыҡтан ҡасып булмай, артабан нисек йәшәргә - үҙегеҙ һайлайһығыҙ. "Кемдер яуызлыҡ ҡылһа, уны ла ғәфү итергәме?" - тип һорарһығыҙ.

Дуҫымдың өс үҫмер ҡыҙын 1987 йылда ҡоралды енәйәтсе өйҙәренә инеп, залда атып үлтергәс, ул ҡайғыға батты һәм үс алыу уйы менән яна башланы. Уның ниҙәр кисергәнен беҙгә Хоҙай күрһәтмәһен. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, дуҫтары ярҙамында, нормаль тормошҡа ҡайтыу өсөн берҙән-бер мөмкинлеге - күрә алмаусылығын онотоп, нисек тә булһа енәйәтсене ғәфү итергә тейешлеген аңланы. Хәҙер уның бөтөн ғүмере ғәфү итергә һәм шулай итеп күңел тыныслығы табырға тырышҡандарға ярҙам итеүгә бағышлана. Уның тарихы беҙгә кешенең хатта иң насар шарттарҙа ла күрә алмаусылыҡтан да, асыуҙан да ҡотола алыуын раҫлай. Быны улар үҙҙәре, йәғни артабан йәшәү хаҡына эшләргә тейеш.

Ауыр һынауҙарға дусар булған кешеләр ике төркөмгә бүленә. Беренсеһенә үҙенең асыуынан һәм күрә алмаусылығынан сыға алмаусылар инһә, икенселәре - башҡаларҙы хәстәрләүсе һәм уларҙың хәлен үҙенекеләй ҡабул итә белеүселәр.

Тормошобоҙҙа етди үҙгәрештәргә алып килгән ваҡиғалар үҙебеҙ һайлағандан ныҡ айырыла. Беҙ үҙебеҙ теләгән кеше булыр өсөн кисерергә кәрәк булғанды кисергебеҙ килмәй. Әммә һәр ҡайһыбыҙға бәлә, ауырыу, яңғыҙлыҡ һәм күңел төшөнкөлөгө кәсәһен төп күтәрә эсергә тура килә. Юғалтыуҙарҙан һуң, беҙ һәр саҡ ҡайғырабыҙ. Ләкин бында төп мәсьәлә шунда: һөҙөмтәлә күңелебеҙ ҡатамы, әллә кешене аңларға өйрәнәбеҙме?

Үҙеңде яратыу мотлаҡмы, әллә үҙеңә оҡшау ҙа етәме?

Эйе! Үҙен яратырға һәләтле булмаған кеше тирә-яҡтағыларҙы ла аптыратып бөтә. Ҡайһы берәүҙәргә яратыу идеяһы уҡ ниндәйҙер уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Шул уҡ ваҡытта улар үҙҙәрен партнерҙары яратырға тейеш, тип иҫәпләй. Сәйер түгелме? Йәғни башта "үҙемде яратырға бер сәбәп тә күрмәйем" тиһегеҙ, һуңынан, яратмайһың, тип ҡатыныһыҙға (ирегеҙгә) асыуланаһығыҙ. Һине яратһындар өсөн тәүҙә саҡ ҡына булһа ла үҙеңә оҡшарға тейешһең!

Беҙ үҙебеҙҙә булмағанды башҡаларға бирә алмайбыҙ. Тимаҡ, үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҡабул итмәйенсә, башҡаларҙы ла нисек бар шулай ҡабул итә алмаясаҡбыҙ. Етешһеҙлектәребеҙгә иғтибар йәлеп итеп, башҡаларҙа ла шундай уҡ етешһеҙлектәр эҙләй башлайбыҙ һәм уларҙы тапһаҡ, еңелерәк булған һымаҡ тойабыҙ. Әлбиттә, табабыҙ, әммә еңеллек килмәй.

Етешһеҙлектәребеҙгә иғтибар туплаған һайын тормош беҙгә яҙаһын бирә. Һәм үҙебеҙҙе-үҙебеҙ язалай башлайбыҙ. Бының өсөн беҙгә ярҙамға ауырыуҙар, ярлылыҡ, яңғыҙлыҡ килә. Үҙебеҙҙе яратмай тороп, беҙҙе тирә-яҡ мөхит яратмаясаҡ. Һуңынан, етмәһә, уны үҙебеҙҙең барлыҡ бәләләребеҙҙә ғәйепләйәсәкбеҙ әле...

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

ФӘҺЕМЛЕ ОСРАШЫУҘАР

**21 мартта, Халыҡ-ара урман көнөнә арнап, Рәсәй кимәлендә "Урмансылар ишектәрен аса" тигән акция үтәсәк. Өфө урман-техник техникумында ла ошо акция сиктәрендә айлыҡ ойошторолған һәм төрлө осрашыуҙар, кисәләр уҙғарыла башлаған. Уҡыу йортондағы сираттағы шундай сарала студенттар менән Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусин осрашты.**

# УРМАН КЕШЕНЕ ЙӘШӘТӘ

## Ә кеше уны ҡурсаларға тейеш!



Әҙәби кисә техникумдың "Урман" ҡурай ансамбленең моңло сығышы менән башланып китте. Тамаша залы Ноғман Мусиндың китабын тотҡан, үҙҙәрен борсоған һорауҙарға яуап алырға ашҡынып килгән студенттар менән шығырым тулғайны. Сәхнәләге экранда яҙыусының биографияһы, әҫәрҙәре тураһында йөкмәткеле мәғлүмәт күрһәтелгәндән һуң, әҙип үҙе сәхнә түренә күтәрелде. Ноғман Сөләймән улы йәш тамашасыларға фәһемле лә, ҡыҙыҡлы ла тормош тарихын бәйән итте, ни өсөн әҫәрҙәре урман һәм кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә арналыуы, урманды ни өсөн яратыуы тураһында ла аңлатып китте.

- Урман, тәбиғәт кешеләрҙе үҫтергән, ашатҡан, йән биреп, ошо көнгә тиклем йәшәткән. Урманһыҙ кеше йәшәй алмаҫ ине, беҙ ошо турала ҡайһы саҡта онотоп китәбеҙ. Беҙ онотҡан өсөн дә тәбиғәткә зыян килә, ер-һыуҙар ҡоротола, бысратыла - был кешенең үҙ тормошона аяҡ салыуы ул, - тине яҙыусы йәштәргә мөрәжәғәт итеп. Ул башҡорт халҡының тарихы, урмандарҙың яҙмышы тураһында ла йәш быуындың күңеленә ғәм һалырға теләп, кәлимә фекерҙәрен еткерҙе.

Осрашыу тамамланғас, әҙипте үҙ күҙҙәре менән күреү, уның уй-фекерҙәрен ишетеү бәхете тәтегән студенттарҙың тәьҫораттарын белергә теләп, уларға мөрәжәғәт иттек. Беренсе курс студенты, Салауат районынан Айнур Атауллин, өсөнсө быуында урмансы булырға теләп, был техникумға килеүе һәм яҙыусы менән осрашыуҙың иҫтәлекле хәтирә генә түгел, урманды һаҡлауҙың мөһим булыуына тағы бер тапҡыр инандырған сара булыуын белдерҙе.

- Ноғман Мусиндың әҫәрҙәрен мәктәптә уҡый торғайныҡ. Шуға бөгөнгө осрашыуға бик ҡыҙыҡһынып килдем. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы тигән оло исем йөрөткән шундай шәхес беҙҙең менән ябай ғына итеп һөйләште. Ул үҙе һәм мөхәббәте тураһында, әҫәрҙәрендәге геройҙар, урмансыларҙың эше хаҡында бик ҡыҙыҡлы итеп һөйләне. Осрашыуҙан бик ҡәнәғәт ҡалдым һәм киләсәктә тағы ла ошондай саралар үткәрелһен ине, тип теләйем, - тине Ейәнсура районынан Зарина Айсыуаҡова ла.

Өфө урман-техник техникумы иң боронғо уҡыу йорттарының береһе, быйыл ул асылыуға 140 йыл тулған. Әлеге көндә унда бөтәһе алты йүнәлеш буйынса көндөҙгө бүлектә 600 студент, ситтән тороп 300 кеше белем ала. Уҡыу йорто етәкселеге киләһе уҡыу йылында туризм йүнәлеше буйынса белем алырға теләүселәрҙе ҡабул итә башларға иҫәп тота.

- Осрашыуҙа саф башҡортса һөйләшеп, яҙыусының матур хәтирәләрен, аҡыллы кәңәштәрен тыңлап ултырҙыҡ бөгөн. Балалар ҙа ихлас ҡабул итте, уның кәңәштәрен, фекерҙәрен күңелдәренә лә һалып ҡуйғандарҙыр, тип ышанғы килә, - тине Өфө урман-техник техникумының уҡытыу эше буйынса директор урынбаҫары Венера Вәлиева.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡалала йәшәгән, бында уҡырға килгән йәш быуындың башҡорт халҡының күренекле шәхестәре менән осрашыуы, әҙәби кисәләрҙә ҡатнашыуы күптәргә тәтемәй торған матур йола. Һуңғы йылдарҙа бындай саралар йыш үткәрелмәй, шуға ла Өфө урман-техник техникумы кеүек уҡыу йорттарының студенттарҙың тәрбиәһенә, йәш быуындың рухын күтәреүгә, донъяға ҡарашын формалаштырыуға ҙур иғтибар бүлеүен юғары баһаларға була. Сөнки тормошон урманға, тәбиғәтте ҡурсалауға бағышларға теләгән йәштәргә мотлаҡ илһөйәр, ғәҙел булырға кәрәк, ә был сифаттарҙы үҫтереүгә тап ошондай махсус саралар булышлыҡ итә лә инде.**

Ғәлиә ШӘМСЕТДИНОВА.

ҠЫҪҠАСА

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ - ҮҘӘКТӘ

✓ **2018 йылда "Башҡортостан продукты" брендын Рәсәйҙә генә түгел, сит илдә лә танытыу күҙаллана.** Республика Хөкүмәте Президиумы ултырышында тейешле планды раҫланылар. "Уға "Башҡортостан продукты" билдәһе менән маркировкаланған тауар етештереүселәргә булышлыҡ итеү системаһын булдырыуға һәм камиллаштырыуға йүнәлтелгән саралар инә. Төп бурыстары - проект экспортерҙары-дипломанттары һанын кәмендә өс тапҡырға һәм экспортер-ойошмаларҙы йылына 5 процентҡа арттырыу", - тип пландар хаҡында Башҡортостан Хөкүмәтендә хәбәр иттеләр.Шулай уҡ брендтың танылыуына булышлыҡ итеү буйынса бөтә саралар республиканың аҙыҡ-түлек етештереүселәренә төбәктә экспортты үҫтерергә ярҙам итәсәк.

✓ **Рәсәй власы балалы ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәрҙән табыш һалымын (НДФЛ) бөтөргән закон проектын раҫланы.** 2018 йылдың 1 ғинуарынан беренсе бала тыуыу йәки уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыу менән бәйле ғаиләләргә айлыҡ пособие түләнә башланы. 2018 йылда уртаса күләме - 10,5 мең һум, 2019 йылда - 10,8 мең һум, 2020 йылда 11,1 мең һум тәшкил итәсәк.Закон проекты балалы ғаиләләргә ярҙам сараларын көсәйтеү өсөн бындай түләүҙәргә физик шәхестәрҙең табышына һалым билдәләнмәүҙе күҙ уңында тота.

✓ **Башҡортостанда кесе эшҡыуарлыҡ өлкәһендә эшләүселәр һаны һуңғы бер йылда 28 мең кешегә артҡан.** Һөҙөмтәлә кесе, урта, микропредприятиелар һәм шәхси эшҡыуарҙар иҫәбе (2017 йылдың туғыҙ айы мәғлүмәттәре буйынса) 480 мең тәшкил итә. Был республика халҡының 25,6 проценты. 2016 йылда 452 мең кесе предприятие хеҙмәткәре иҫәпләнгән. Кесе һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттарында мәшғүл хеҙмәткәрҙәрҙең уртаса исемлек иҫәбе буйынса Башҡортостан Волга буйы федераль округында өсөнсө һәм Рәсәйҙә 11-се урында тора, тип хәбәр иттеләр республиканың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитетының йомғаҡлау коллегияһында.

✓ **18 марттан илдә Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренең яңы талабы үҙ көсөнә инә.** Төндә юл-транспорт ваҡиғаһына тарыған (йә иһә юлда туҡтаған) водителдәр машинанан мотлаҡ рәүештә яҡтылыҡты кире ҡайтарыусы жилетта сығырға тейеш. Ҡағиҙә күреү мөмкинлеге насар булғанда көндөҙгө ваҡытта ла үҙ көсөндә ҡала. Тәүлектең ҡараңғы ваҡытында юл-транспорт ваҡиғаһынан һуң машинанан сыҡҡан водителдәрҙе йыш ҡыш башҡа автомобилдәр бәрҙереп китеү буйынса күңелһеҙ статистика бындай ҡарар ҡабул итеүгә сәбәпсе булып торҙо. Жилет йәки башҡа еңһеҙ өҫ кейеме дәүләт стандарттары талаптарына тап килергә тейеш. Ҡағиҙәне боҙоусыға административ иҫкәртеү йәки 500 һум күләмендә штраф янай.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Март (Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (17) дүшәмбе | 6:29 | 7:58 | 13:30 | 17:27 | 18:57 | 20:27 |
| 6 (18) шишәмбе | 6:26 | 7:56 | 13:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |
| 7 (19) шаршамбы | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 17:31 | 19:01 | 20:31 |
| 8 (20) кесе йома | 6:21 | 7:51 | 13:30 | 17:33 | 19:03 | 20:33 |
| 9 (21) йома | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 17:35 | 19:05 | 20:35 |
| 10 (22) шәмбе | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 17:37 | 19:07 | 20:37 |
| 11 (23) йәкшәмбе | 6:13 | 7:431 | 13:30 | 17:39 | 19:09 | 20:39 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**4 март "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

**6 март "Алтын асҡыс"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 10.00, 12.00 0+

**6 март "Эҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама 12+

**7 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия 12+

**8 март "Кил әле, кил әле, сәмле ярыш күр әле!.."** ҙур концерт 12+

**9 март "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

1 марттан шәмбе йәм йәкшәмбе спектаклдәре 18.00 сәғәттә башлана

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 март "Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия 12+

**4 март "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**6 март "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

**7 март "Өс мөхәббәт тарихы"** театрлаштырылған тамаша 12+

**8 март "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**3 март "Урғыла моң, сыңлай талир тәңкәләр"** Райхана һәм Миңлеғәле Хәсәновтарҙың юбилей концерты 6+

**8 март "Китмәҫкә килгән ҡошом"** (Э. Йәһүҙин), комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 март "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+

**4 март "Слоненок"** (Р. Киплинг)

**8 март "Муха-Цокотуха"** (И. Романов) 0+

**9 март "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков) 0+

Спектаклдәр 12.00, 14.00 сәғәттә башлана

АФАРИН!

# НАҘГӨЛДӨҢ БӘХЕТЛЕ БИЛЕТЫ



(Башы 1-се биттә).

Ысынлап та, музыкаль белемһеҙ һәм музыка серҙәренә төшөндөрөүсе уҡытыусыһыҙ Салауат районының Янгантау ауылында йәшәгән Наҙгөл Отузова Лара Фабиан версияһындағы Adagio композицияһын башҡарып, тотош Рәсәйҙе һоҡландырҙы, тиергә мөмкин. Ютуб каналындағы был видеояҙманы ошо көндәрҙә генә 400 меңгә яҡын кеше ҡараған.

"Голос. Дети" тапшырыуының кастингына саҡырыу алғас, бер аҙ шанҡып ҡалдым, хатта илап алдым. Был минең өсөн бик мөһим. Биш йыл элек кенә тормошомда шундай үҙгәрештәр булыр тип уйламай ҙа инем", - тип яҙа Наҙгөл "Бәйләнештә" селтәрендәге сәхифәһендә. Биш йәшендә тәүге тапҡыр Башҡортостан юлдаш телевидениеһында сығыш яһаһа ла, нәсел-нәсәбе араһында сәнғәт кешеләре юҡ ҡыҙҙың. Күрәһең, бында, ысынлап та, Валерий Меладзе әйтмешләй, Янгантауҙың шифалы һауаһы уның тауышын асҡандыр, тип фаразларға ғына ҡала. Әйткәндәй, Наҙгөл үҙе лә һәләтен тыуған ягы тәбиғәтенең йоғонтоһона бәйләй. Ә күңеле, ысынлап та, йыр-моңға тартыла. Сәхнәлә ул йырламай, ә доньяһын онотоп, ниндәйҙер икенсе һалөткә инә, йыр һүҙҙәре, көй булып ағыла. Район күләмендә үткәрелгән "Йәш тауыштар" конкурсында ҡатнашҡандан һуң, ҡыҙҙың моңло һәм көслө тауышына, башҡарыу үҙенсәлегенә иғтибар иткән мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре уны район кимәлендә, шифаханала үткән һәр концертҡа саҡыра башлай. "Наҙгөл бәләкәйҙән тырыш, маҡсатына ынтылышлы булды. Мәктәптә бер сара уның ҡатнашлығынан тыш үтмәй, - ти әсәһе Юлиә. - "Уфимская волна 2016" конкурсында "Балалар" номинацияһында ла еңеү яулауы уға тағы ла киңерәк офоҡтар асты. Әйткәндәй, "Уфимская волна 2016" конкурсында уға "Голос. Дети" финалистарының Өфөлә үтәсәк концертына ике билет бүләк иттеләр. Бәлки, тап улар бәхетле билеттар булып, бөгөнгә ҡаҙанышына шулар этәргес булғандыр. Һуңынан ҡыҙым ошо проектҡа ҡатнашыу хыялы менән янды. Былтыр республика һәм халыҡ-ара конкурстарҙа бер-бер артлы дүрт гран-при яуланы".

Санкт-Петербургта үткән "На крыльях таланта" конкурсында - 1-се дәрәжә лауреат, "Илһам" конкурсында - 1-се дәрәжә лауреат. Бөйөк Еңеү көнөнә арналған конкурс - гран-при, Халыҡ-ара "Талантлар планетаһы" конкурсында - гран-при, Бөтә Рәсәй "Гәлсәр мозаика" конкурсында - гран-при, "Башҡортостан талантта-ры"нда - гран-при... Бынан тыш, уға Бөтә Рәсәй "Орленок" лагерында ял итеп ҡайтыу бәхете лә тәтей. Унда ла тиҫтерҙәрен һәм вожатыйҙарҙы тауышы менән әсир итә.

"Ҡыҙығыҙҙың сығышы ваҡытында ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ?" - тигәнгә, Юлиә ханым: "Уның сығышын ҡарау мөмкинлеге теймәне. Эштә инем. Бер ваҡыт телефонымa ҡотлауҙар яҙылған смстар килә башлағас ҡына Наҙгөлдөң беренсе этаптан үтеүен аңланым", - тип яуапланы. Мәскәүгә үҙенең барыу мөмкинлеге булмағас, ҡыҙын Салауат район хакимиәтенең мәғариф идаралығы начальнигы Нелли Рәхмәтуллина менән ебәрә әсә.

"Наҙгөл күҙеген ҡуйыр тип ҡурҡмайһығыҙмы?" - тигән һорауымды ла бирмәй түҙмәнем. Юлиә ханым: "Әлбиттә, әҙерәк шик бар, яман күҙҙәрҙән һаҡларға тырышабыҙ инде", - тип, тыныс ҡалырға тырышһа ла, ғәзиз балаһы өсөн тулҡынланыуы, борсолоуын тауышы ғына белгертте. Ә беҙ үҙ сиратыбыҙҙа Башҡортостан данын тағы ла бер баҫҡысҡа күтәргән йәш милләттәшебеҙ Наҙгөл Отузоваға яңынан-яңы үрҙәр, юлында тик изге күңелле кешеләр генә осрауын, Аллаһы Тәғәләнең уны үҙ хозурында ғына йөрөтөүен теләйбеҙ!

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ЯҢЫ КИТАП СЫҠТЫ

## РӘМИ ҺӘМ ХӘЙӘМ



**"Китап" нәшриәтендә Ғүмәр Хәйәмдең Рәми Ғарипов тәржемәһендәге робағиҙары тәүге тапҡыр факсимиль баҫмала донъя күрҙе. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышында ошо хаҡта хәбәр итте.**

"Бик ҡыҙыҡлы эш. Бында күренекле башҡорт шағирының Ғүмәр Хәйәмдең робағиҙарын башҡорт теленә тәржемәләү буйынса эшмәкәрлеге факсимиль вариантта һүрәтләнгән. Йөкмәткеле баҫма, - тине Рөстәм Зәки улы. - Светлана Чураева китапҡа баш һүҙендә: "Шағирыбыҙҙың төп хеҙмәте теүәл 40 йыл уҡыусыларҙан йәшереп тотолдо", - тип яҙған. Рәми Ғариповтың күп көс һалған хеҙмәте бары тик хәҙер, XXI быуаттың икенсе ун йыллығында ғына баҫылды. Уның ҡулъяҙма рәүешендә донъя күреүе бик мөһим. Ошо томды, эште ҡарап сығырға кәнәш итәм. Был - тәүге дана, әле генә типографиянан сыҡҡан. Тиҙҙән китап һатыуҙа булыр, китапханаларҙы тулыландырыр, тип ышанам..."

Ғүмәр Хәйәмдең робағиҙары тәржемәһе беренсе тапҡыр айырым китап булып 1992 йылда баҫылып сыҡҡайны. Яңы баҫманың үҙенсәлеге шунда: уҡыусыға башҡорт шағирының тәэтмәләре һәм иҫкәрмәләре индерелгән ҡулъяҙмаһы тәҡдим ителә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2017 йылда "Китап" нәшриәтенең "Ғүмәр Хәйәм һәм Рәми Ғарипов - замандар бәйләнеше" проекты республика Башлығының 1,8 миллион һумлыҡ грантын алды.

## ЗӘЙНӘБ АПАЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ




**Өфөлә "Китап" нәшриәтендә Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның 110 йыллығына китап баҫылып сыҡты. Йыйынтыҡҡа уның быға тиклем баҫылмаған мәҡәләләре, ижади портреттар, арнауҙар һәм Биишева хаҡында иҫтәлектәр ингән. Башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған күп кенә материалдар тәүгә донъя күрҙе.**

Яҙыусының китаптың беренсе бүлегендәге мәҡәләләре һәм очерктары ҙур иғтибарға лайыҡ. Мәҡәләләр 1943-1980 йылдарҙы үҙ эсенә ала. Икенсе бүлектә Зәйнәб Биишеваның коллегалары һәм яҡындарының шиғри арнауҙары, иҫтәлектәре тупланған. Улар араһында - Зәйтүнә Шәрипова, Ғилемдар Рамазанов, Марат Миңһажетдинов һәм башҡаларҙың тәүге тапҡыр баҫылған мәҡәләләре. Яҙыусының улы, ҙур ғалим-химик Тельман Әминевтың, ейәнсәре, әлеге көндә Чехияла йәшәгән йәмәғәт һәм сәйәси эшмәкәр Йәмилә Стехликованың очерктары айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Китаптың төҙөүсеһе һәм инеш һүҙ авторы - Башҡортостандың халыҡ шағиры Ҡәзим Аралбай. "Китап өстөндә эш йылға яҡын барҙы. Республиканың Китап палатаһында, Башҡортостандың Милли китапханаһында, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы дәүләт унитар предприятиеһы радиоархивында материалдар яйлап тупланды. Баҫма шуныһы менән үҙенсәлекле: ундағы материалдар, текстар, Зәйнәб Биишеваның ғаилә архивынан һирәк осраған фотоһүрәттәр, документтар тәүге тапҡыр донъя күрҙе", - тип һөйләне төҙөүсе.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕЛЕМЛЕ КЕШЕ...

### күккә ашыр

Һары мәтрүшкә - алтмыш төрлө ауырыуға, күрән мәтрүшкә етмеш төрлө ауырыуға дауа.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бәхәстәрһеҙ донъя бик күңелһеҙ булыр ине. Бар тере йән тураһында фекер алышыу, бәхәсләшеү кәрәк.

**(Чарли Чаплин).**

Ҡыҙ-ҡатындар матур итеп кейенергә, шул кейем аҫтындағы тәненең бер өлөшөн күрһәтеп-күрһәтеп алырға һәм шунының менән үҙенең табыныусыларына уны ҡасан да булһа бер тулыһынса күреү өмөтө бирергә ярата. Тәбиғәт тә ҡатын-ҡыҙ һымаҡ...

**(Дени Дидро).**

Һәләтлелек мөмкинлектәрҙән тыш бер нәмә лә түгел.

**(Наполеон Бонапарт).**

Бары тик йөрәк кенә барыһын да күрергә һәләтле. Иң мөһимен күҙҙәр менән күреп булмай.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Яҙмыш беҙҙең ҡылыҡтарҙың ҡап яртыһы менән идара итә, ҡалған яртыһы менән идара итеүҙе беҙҙең ҡарамаҡҡа ҡалдыра.

**(Николло Макиавелли).**

Ҡағыҙҙәләрҙе күҙәтеүҙән туҡтаһаҡ, беҙ юғалып ҡалабыҙ һәм нимә эшләргә лә белмәйбеҙ. Ҡағыҙҙәләргә буйһоноп йәшәйек.

**(Людовик Бурбон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:"Бер изге әүлиә океан яры буйында йөрөп ятҡанда уның эргәһендә йәш кеше килә һәм шулай тип ҡысҡыра:**

**- Мин көн дә һинең ошонда бер хәсрәтһеҙ һәм хәстәрһеҙ йөрөп ятҡаныңды күрәм. Шул уҡ ваҡытта тирә-яҡында күпме ҡайғы-хәсрәт, хәйерселек хөкөм һөрә. Һин бит шул тиклем ҡеүәтле кешеһең һәм һинә ошо океан һыуын нефтҡә әүерелдереү бер ни тормай. Шуны эшләһәң, беҙҙең ил кешеләре был тиклем фәҡирлектән ыҙа сикмәҫ ине!**

**Йәш кешенең был йән асыуы менән әйтелгән һүҙҙәренә ҡаршы әүлиә шулай тип яуап бирә:**

**- Эйе, мин ысынлап та океандағы һыуҙы нефтҡә әйләндерә алыр инем. Ләкин ул ваҡытта был океанға шырпы ташлаусы бер аҡылһыҙ әҙәм мотлаҡ табыласаҡ бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 2 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 384/03